✓ ***Күңел тыныслығы өсөн түбәндәге ҡағиҙәләргә буйһоноу фарыздыр: тейешһеҙ һүҙ һөйләмә; тәүбә ит; Аллаһҡа шөкөрана ҡыл; көсһеҙҙәргә ярҙамсыл бул; бар ғәмәлеңде "бисмиллаһ" менән башла; йомарт бул; таныш-белеш менән аралашып йәшә; хәләл ризыҡ менән туҡлан; булғанын әрәм-шәрәм итмә.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

14 - 20 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№24 (598)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тәнҡиттән ҡурҡырға ярамай...

"Журфест" һығымтаһы шулай

5

...Мин киткәнгә илап ҡайғырмағыҙ,

Батыр ирҙәр тыуыр тағы ла!

6

Донъябыҙ тотҡаһы...

донъя ҡәҙерен белгән ирҙәрҙә

8-9,11

Вәзәмдәр шәлде бәйләмәй,

вәзәмдәр шәлде һуға...

12

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Баш йортобоҙ Өфөнөң һөйөндөргән дә, көйөндөргән дә мәлдәре нимәлә күренә?

Төлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, яҙыусы: Һуңғы йылдарҙа миңә ижад эше буйынса ла, турист рәүешендә лә сит илдәрҙә күп йөрөргә тура килде. Бер йыл Амстердамда йәшәгәндә, йәйәүләп тә, велосипедта ла уны арҡырыға-буйға иңләп сығылды, сөнки ул төрлө мизгелдә төрлөсә матурлығы менән хайран ҡалдыра. Сортлы голландия ләләләре, башҡа сәскәләре генә ни тора! Парижда бер нисә тапҡыр булып, һуңғы сәйәхәтемдә балаларымды ла йәйәүләтеп ҡала буйлап йөрөттөм. Әйткәндәй, үҙебеҙҙең Өфөлә лә гел йәйәү йөрөйөм. Былтыр шулай Телеүҙәктән алып С.Перовская урамына хәтлем йәйәүләп үтергә тура килгәйне. Алтын көҙҙөң сыуаҡ бер мәле... Ә Өфөбөҙ беҙҙең иҫ киткес матур икән дә! Париждарың ары торһон (уның урамдарынан үткәндә туҙан баҫҡан, бысраҡ тәҙрәләрен ялтыратып йыуып ташлағым килгәйне). Әйткәндәй, Париждан күпкә таҙараҡ, төҙөгөрәк тә беҙҙең Өфө. Шуныһы ҡыуаныслы: һуңғы ваҡытта баш ҡалабыҙҙа йәйәүләләр һәм велосипедсылар күп күренә. Велосипедсылар өсөн тротуарҙар буйлап махсус юлдар билдәләнгән. Шул уҡ ваҡытта ҡала үҫешенең ҡотолғоһоҙ бер күренеше лә өйкәп ҡуя күңелде. Элегерәк Комсомол урамында урынлашҡан "Ватандаш" журналы редакцияһына ошо урам буйлап йәйәү йөрөгәнем хәтерҙә. Күпселек өлөшө шәхси ағас йорттарҙан торған бындағы кварталдар ниндәй ҙә ниллек, йәшеллек, сафлыҡ бөркөп ултыра ине! Яҙын, алмағас, сейә, муйылдар сәскәгә төрөнһә, урам күбектәй ҡабарып, ап-аҡ болоттарҙан ғына торғандай ине. Үкенескә күрә, иҫке Өфөнөң ана шундай тәбиғи кварталдары юҡҡа сыға бара. Бындай урамдар йәйәүләләр өсөн дан ине лә бит... Баш ҡаланың тарихи урындары күп, улар ҙа бер заман прогресс ташҡыны аҫтында ҡалып, юйыла күрмәһен ине. Кемгә нисек - әммә миңә Ҡала майҙанында торған Ленин һәйкәле баш ҡалабыҙ өсөн ғорурлыҡ тойғоһо ғына уята: тарихҡа ихтирам һаҡлай белә, тимәк, Өфө граждандары. Дөрөҫ, һәйкәлдәрҙе емереп, дәреслектәрҙе ҡайтанан яҙып ҡына тарих яһап булмай шул. Тарих - ул тейелгеһеҙ.

Таҙалыҡ яғына килгәндә, шулай уҡ һәр граждандың тыуған ҡалаһы алдында шәхси яуаплылығы етешмәүе йә уның бөтөнләй булмауы эсте бошора. Этен "һуғарырға" сыҡҡан өфөлөнөң, сит илдәге кеүек, дүрт аяҡлы дуҫы артынан кеҫәһенә шыптыр моҡсай һалып, кескәй һоҫкоһон тотоп таҙартып йөрөгәнен күргәнегеҙ бармы һеҙҙең? Ә бына сит илдә фәкәт шулай эшләйҙәр. Ул ғына ла түгел, тәмәке төпсөгө ташлаған кешене лә күрмәҫһең - шундуҡ полиция хеҙмәткәре йә берәй инспектор пәйҙә була эргәңдә. Контроль яҡшы ҡуйылған, штраф күләмдәренең дә тәъсире көслө - бына нимә тәртипкә өйрәтә кешене.

Тағы бер нәмә хаҡында өндәшмәй ҡала алмайым: рәхмәтле була беләйек. Ҡышҡы сатлама һыуыҡтарҙа ла, йәйен дә крандарыбыҙҙа - эҫе һыу; ҡала халҡы өсөн уңғандарыбыҙ төнөн мейес янында дежурҙа тороп, йылы икмәген дә бешереп өлгөртә, иртә менән тирә-яҡ райондарҙан һөт-ҡаймағын да килтереп еткерәләр - тағы ни кәрәк? Аллаға шөкөр, бик яҡшы йәшәй өфөләр.

(Дауамы 2-се биттә).

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

Мөнир ИҠСАНОВ

ТОҒРО ДУҪЫМ "КИСКЕ ӨФӨ"М БАР

Бер аҙна ла үтмәй, һағынамын,
Көтөп алам "Киске Өфө"нө.
"Киске Өфө" тигән йән дуҫҡайға
Бер ҡараштан күңел эҫенде.

Халҡым күңеленә бағам кеүек,
Ҡулға алһам "Киске Өфө"нө.
Башҡорт милләтенең йөҙө бит ул,
Башҡорт илкәйенең көҙгөһө.

Моңһоу уйҙарымды, ғәм-сәмемде
Уятыусы "Киске Өфө" ул.
Тыуған ере, теле өсөн көйгән
Халыҡ йөрәгенең өнө ул.

Һәр бер һүҙен хәтеремдә тотоп
Ҡолаҡ һалам "Киске Өфө"гә.
Йылдар үтә тора, бер һүҙе лә
Әүерелмәй "Иҫке Өфө"гә.

"Киске Өфө" - аҡыл сығанағы,
Өҙөлмәһәм "Киске Өфө"нән,
Айырылмам рухи ризығымдан,
Хаҡ юлымдан, тимәк, өҙөлмәм.

Шул сығанаҡ мәңге һаҡланһынсы,
Яңһын халҡым, "Киске Өфө"м, тип.
"Киске Өфө"һөн ул ҡурсалаһа,
Һаҡлап ҡалыр, тимәк, үҙен бит.

Ҡайҙа булһам да мин, яндарымда
Тоғро дуҫым - "Киске Өфө"м бар.
Шуға беләм, һүнмәҫ өмөтөм бар,
Намыҫ менән йәшәр көсөм бар.

✓ *Салауат Юлаев проспектына ҡот биреп, манаралары ҡалҡып килгән мәсет төҙөлөшө мине айырыуса ҡыуандыра: рухиәтебеҙҙе байытып ҡына ҡалмаясаҡ ул, ә ҡалабыҙҙың милли йөҙөн дә сағылдырасаҡ, тигән өмөттәмен.*

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?

АУЫЛ ХАЛҠЫНА... баҙар ябылды

Рәғиз МУЛЛАҒОЛОВ, Башҡорт дәүләт аграр университеты Урал аръяғы филиалының уҡыу-тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары, биология фәндәре кандидаты, доцент: Ике йыл элек Алыҫ Көнсығыш яҡтарына барып ҡайтҡайным, Башҡортостанда ауыл хужалығы кимәле сағыштырмаса юғары икән, тигән тәьҫорат ҡалды. Шулай ҙа, шәхси хужалыҡ, фермерлыҡ менән аҡса эшләргә теләүселәргә тейешле шарттар аҙ. Мәҫәлән, фермерҙарҙы беренсе йылдан уҡ һалымдар менән батыралар, ауыл хужалығы буйынса кредиттың да ҡайтарып түләү хаҡы уғата юғары. Сит илдә ул 2 процент тәшкил итһә, беҙҙә 30-40 процентҡа барып еткән кредиттар бар. Мал үрсеп, етештереү йәғә һалынғансы, 10-20 йыллап ваҡыт кәрәк. Ошондай шарттарҙа ауылда йәшәргә теләүселәр булмауына аптырарлыҡ та түгел, халыҡтың күңеле ҡайтты. Етмәһә, быйылғы йылдың 1 майынан Таможня союзының "Ит һәм ит продукцияһы хәүефһеҙлеге", "Һөт һәм һөт продукцияһы хәүефһеҙлеге" техник регламенттары үҙ көсөнә инде. Яңы закондарға ярашлы, ауыл халҡы малын кәртәһендә һуйып, баҙарға сығара алмай. Шулай уҡ, махсус рөхсәт ҡағыҙы булмайынса, һөт продукциялары менән дә һатыу итергә ярамай. Малды махсус ҡулайлаштырылған урындарҙа ғына һуйырға мөмкин, йәки уны етештереү предприятиеһы килеп алырға тейеш. Йәнәһе, ауыл кешеһе яҡындағы ҡалаға барып, ит цехына мөрәжәғәт итә, улар малды килеп ала ла һуйып бирә. Кем килеп ябай ауыл кешеһе өсөн шундай изгелек ҡылып йөрөһөн? Килгән хәлдә лә, арзан хаҡҡа һатып аласаҡтар. Үҙенән артҡан һөт-ҡаймағын, йомортҡаһын баҙарға сығарып һатып, бер аҙ аҡса эшләйем, тип тырышҡан хужабикәләр нишләргә тейеш хәҙер? Саҡ торған халыҡты тағы ла нығыраҡ ергә туңҡайтып, бөлгөнлөккә төшөрөү ниәтендә ҡабул ителгән закон кеүек был.

Ҡала халҡының магазин аҙығына ҡарағанда баҙарҙа һатылған продукцияға өҫтөнлөк биреүе ҡайһы бер ағайҙарҙың яҫы кеҫәләренә һуға шул. Закондар үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғыртыусылар тарафынан ҡабул ителгән, тигән фекер тыуа. Һуңғы ваҡытта ауыл хужалығы буйынса төрлө сараларҙа колхоз-совхоздарҙы тергеҙеү тураһында һүҙ ҡуҙғатыла башланы. Емереп, бөтәһен дә бөтөрөп, хужалыҡтарҙан харабалар ғына ятып ҡалғас, кире тергеҙеүҙән ниндәй килем алырбыҙ, билдәһеҙ. Унан һуң, йәштәрҙе үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртып, үҙе өсөн генә йәшәргә өйрәтеп тәрбиәләнек бит һуңғы йылдарҙа, хәҙер уларҙан дөйөм хужалыҡ төҙөтөп булырына шикләнәм.

Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Баш йортобоҙ Өфөнөң һөйөндөргән дә, көйөндөргән дә мәлдәре нимәлә күренә?

(Башы 1-се биттә).

Рим ХӘСӘНОВ, композитор, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре: Ғүмеремдә бик күп илдәр гиҙеп, бик күп ҡалалар күрҙем, ләкин Өфөнән дә яҡшыраҡ, Өфөнән дә яҡтыраҡ, йөрәгемә Өфөнән дә яҡыныраҡ башҡа ҡаланың донъяла юҡ икәнлеген күптән аңланым. Благоварҙа тыуып үҫһәм дә мине кеше иткән, аяҡҡа баҫтырған, сыныҡтырған Өфөмдө тыуған ҡалам тип иҫәпләйем. Алыҫ сәфәрҙәрҙән Өфөмә урап ҡайтһам, фәҡәт һөйөнәм генә, бында мине көйөндөргән нәмә юҡ. Һуңғы ваҡыт баш ҡалабыҙ күҙгә күренеп күркәмләнә, заманса архитектураһы менән дә, инфраструктураһы менән дә илдә генә түгел, донъя ҡалалары рәтенән лайыҡлы урын ала бара. Ә уның һыу артериялары үҙе генә ни тора! Шағирҙарҙы һоҡландырып, йырҙарҙа дан йырланған Ағиҙеле, Ҡариҙеле, Диме ҡала һауаһын таҙартып, сафландырып ебәрә. Ә халҡыбыҙ һуң беҙҙең! Баш ҡалабыҙҙа ла, республикабыҙҙа ла уникаль халыҡ йәшәй бит. Ирекһеҙҙән, ғүмерҙә һуғыш күрмәгән ожмах кеүек ерҙәрендә ҡайғы-хәсрәтһеҙ генә йәшәп ятҡан австралиялылар менән сағыштырам: бигерәк бер ҡатлылар инде бына! Өфөлә бөтөнләй башҡа менталитет: яҙмыш һынауҙарына сыныҡҡан халҡыбыҙ саф күңелле, хисле, уйлы-моңло, аҡыллы. Йырлы-моңло, тигәндән, заманында Назар ағай Нәжми һүҙҙәренә яҙған "Өфө йүкәләре" тигән йырымды бөтөн Өфө йырлап кинәнә ине. Уны Өфө гимны тип тә йөрөттөләр, ләкин мин үҙем Рәсих Ханнановтың "Өфө - Урал ынйыһы" тигән шиғырына яҙған йырымды баш ҡала гимны тип иҫәпләйем. Әйткәндәй, бер көн элек кенә шундай ҡыҙыҡҡа тап булдым: кис Салауат һәйкәле майҙанына барып сыҡһам, бер егет баянда уйнап, шул йырҙы йырлап ултыра! Күңелем тулып китте...

Мөхәмәт АҪЫЛБАЕВ, Өфө заводтарының береһендә 40 йыл эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан хеҙмәт ветераны: Әйтергә лә түгел, баш ҡалабыҙ йыл үҫһен - ай үҫә, ай үҫһен - көн үҫә. Ауылдан туғандар, таныштар килһә, бөтәһенең телендә бер үк һүҙ: "Өфөнө хәҙер танырлыҡ та түгел - көндән-көн ҙурая, матурлана!" Эйе шул, үҙем дә күреп-белеп торам, ни тиһәң дә, 45 йылға яҡын баш ҡаламда йәшәйем. Һәр бер ҡаланың, айырыуса заманса мегаполистар үҫешенең генераль планы ҡала халҡына уңайлы эш һәм тормош шарттары булдырыуҙы төп маҡсат итеп ҡуйырға тейеш, тип аңлайым мин. Шулай бер ваҡыт Өфөбөҙҙөң яҡындағы йылдарға үҫеш планы менән ҡыҙыҡһынырға булып киттем. Гәзиттәрҙән, интернеттан уҡып, шуны белдем: Өфөнөң ғәмәлдәге үҫеш планы 2006 йылда уҡ төҙөлгән икән. Эксперттар әйтеүенсә, ул бөгөнгө көн талаптарына яуап бирмәй, иҫкергән. Шуға күрә әлеге ваҡытта баш ҡала үҫеше стратегияһын - 2016 йылға генераль план әҙерләү буйынса эштәр башланған. Ул мегаполистың арҡырыға-буйға, бейеклеккә генә үҫеүен түгел, ә социаль, мәҙәни һәм иҡтисад өлкәһендәге перспективаларын да күҙаллаясаҡ. Әйткәндәй, әле Өфөләге бөтөн тип әйтерлек төҙөлөш-төҙөкләндереү эштәре киләһе йыл баш ҡалала үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттары менән бәйле алып барыла: "Өфө" халыҡ-ара аэропортынан алып, ВДНХ күргәҙмәләр комплексы, "Нефтсе" һарайы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры, ҡунаҡханалар комплексы төҙөлөшө - былар барыһы ла Өфөнө Рәсәйҙәге заманса, ҙур һәм уңайлы ҡалалар рәтенә күтәрәсәк. Салауат Юлаев проспектына ҡот биреп, манаралары ҡалҡып килгән мәсет төҙөлөшө мине айырыуса ҡыуандыра: рухиәтебеҙҙе байытып ҡына ҡалмаясаҡ ул, ә ҡалабыҙҙың милли йөҙөн дә сағылдырасаҡ, тигән өмөттәмен. Ҡасандан бирле инде, юғиһә, Өфөнө башҡорт ҡалаһы итеп танытырға тейешле уның милли йөҙө хаҡында ҡоро һүҙ һөйләүҙән уҙа алмайбыҙ. Тағы бер мәсьәлә борсой мине: Өфөбөҙҙөң "йәшел ҡала" тигән даны бар, шуны һаҡларға ине. Был турала күп яҙыла, шунса ағас ултыртылды, тигән отчет юлдары ла күренеп ҡала, ләкин ҡайһы бер урамдарыбыҙ иркенәйгән һайын, яланғаслана бара - был күҙгә ташлана бөгөн. Мыжғып торған машиналарға ҡалабыҙҙың йәшел ҡалҡаны иҫәбенә урын бирәбеҙ. Башҡа төрлө юлдарын эҙләргә, табырға тырышырға ине, мәҫәлән, ҡайһы бер иҫтәлекле, тарихи урындар радиусында автохәрәкәтте сикләү һ.б. шундайыраҡ тыйыу саралары кәрәк. Юғиһә, хәҙер Өфө урамдарына көндөҙ сығыуы ла ҡурҡыныс: руль артында кем етте - шул, нисек етте - шулай йөрөп яталар, юл ҡағиҙәһе тупаҫ боҙола, күпме кеше һәләк була... Ҡайҙа һуң ул ЮХХДИ полкы хеҙмәткәрҙәре? Ниңә хәрәкәт ағымы ташҡындай көслө урындарҙа, исмаһам, патруль постары тормай?

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

ИҒТИБАР!

ХӨРМӘТЛЕ УҚЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланыуға бик аҙ ғына ваҡыт ҡалып бара. Киләсәктә лә "Киске Өфө" гәзитенең тоғро уҡыусылары икәнегеҙҙе раҫлап, беҙгә дуҫ, теләктәш, таяныс булып ҡалыуығыҙҙы бик-бик теләйбеҙ. Әлеге миҙгел - баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнде йөрәгегеҙ менән аңлаһағыҙ ине, тибеҙ.

• Шулай итеп, 2014 йылдың икенсе яртыһына **50665** индексы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тингә**, **50673** индексыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тингә** яҙылып була.

• **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Июндә 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ Гөлнур Яҡупованың **"Төш юрау китабы"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

• **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog.kiskeufa.ru.*

Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Берҙәм Рәсәй" фирҡәһе үткәргән праймериз һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан президентлығына өс кандидат билдәләнде: Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов, Дәүләт Думаһы депутаты Рафаэль Мәрҙәншин, БР Адвокаттар палатаһы президенты Булат Йомадилов. Башҡортостан Президентлығына кандидат тураһындағы һуңғы ҡарар 21 июндә "Берҙәм Рәсәй" партияһы төбәк бүлексәләре конференцияһында ҡабул ителәсәк.

✓БР Хөкүмәте Йортонда Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов 2021 йылда XI Бөтә донъя уйындарын үткәреү хоҡуғына һайлап алыу конкурсына Өфөнө әҙерләү буйынса Ойоштороу комитеты ултырышын уҙғарҙы. "31 июлгә тиклем Халыҡ-ара Бөтә донъя уйындары Ассоциацияһы штаб-фатирына ғариза китабын тапшырырға кәрәк. Уйындар 2021 йылда июль-августа 11 көн дауамында барасаҡ. Халыҡ-ара талаптарға беҙҙә 25 спорт ҡоролмаһы яуап бирә. Уларҙың 13-өө яҡшы торошта, етәүһе реконструкциялау йәки төҙөлөш стадияһында. Бынан тыш, беҙгә тағы ла 25 яңы объект төҙөргә кәрәк", - тип хәбәр итте Рөстәм Хәмитов.

✓Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов Мәрхәмәтлек эшмәкәрлеге мәсьәләләре буйынса республика советы кәңәшмәһе үткәрҙе.Билдәләнеүенсә, тик былтыр ғына республикала хәйриә ойошмаларының һаны 230-ҙан 300-гә тиклем арты. 2006 йылдан алып ҡала һәм райондарҙың социаль үҫешенә ярҙам итеү өсөн 43 фонд теркәлгән. Шулай уҡ төбәктә шәфҡәт күрһәтеүсе, волонтерҙар һәм ярҙамға мохтаж кешеләрҙең реестры төҙөлә. Тик Өфөлә генә изгелек күрһәтеүселәр реестрына 600-ҙән ашыу юридик һәм физик кеше, 27 хәйриә фонды ингән.

✓БР Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов Түбәнге Новгородта Волга буйы федераль округы төбәктәрендә мотор яғыулығы сифатында тәбиғи газды файҙаланыуҙы киңәйтеү мәсьәләләре буйынса ултырышта ҡатнашты. Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич рәйеслегендәге ултырышта Волга буйы федераль округы төбәктәрендә газ заправкаһы инфраструктураһын үҫтереү, автомобиль һәм автобус паркын, шулай уҡ ауыл хужалығы, коммуналь һәм арзанлы газда эшләүсе башҡа махсус техника паркын киңәйтеү перспективалары тикшерелде.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

Әҙәм балаһының Аллаһы Тәғәләнән үтенеп-ялбарғаны - үҙенә, балаларына, яҡындарына һаулыҡ теләү, сөнки һуңғы ваҡыттарҙа илебеҙҙә сирлене яратмайҙар ҙа, йәлләмәйҙәр ҙә, бик ярҙам итеп барырға ла тырышып тормайҙар. Был әйткәндәрем стационар медицина учреждениеларына бигүк ҡағылмаһа ла (ә, бәлки, тиҙҙән ҡағылыр ҙа әле, сөнки яҡын арала Рәсәй стационарҙарын 130 мең койка-урынға ҡыҫҡартыу көтөлә) поликлиникаларҙа бының ниндәйҙер дәрәжәлә шулай икәнлегенә үҙ хәлемдән сығып инандым.

МИН НИСЕК ИТЕП...

табипҡа яҙыла алманым

Йыл һайын медицина университетынан уҡытып сығарылған белгестәр ҡайҙа китеп юҡ була икән ул? Ҡайҙа барма, ҡасан барма - врачтар етешмәй беҙҙә, хатта баш ҡалабыҙ Өфө райондары поликлиникаларында ла! Мин Сипайлово биҫтәһендә йәшәйем. Ошо ҙур биләмә халҡы ни бары бер поликлиникаға ҡарап тора, тип әйтер инем, күптән түгел Королев урамы осонда (2/2) бәләкәй генә бүлексә асып, эргә-тирәлә йәшәгән халыҡты шунда "ҡыуҙылар", унда 3 терапевтан башҡа бер белгес тә юҡ, улары ла тулы ҡеүәтенә эшләй алмай: береһе - үҙе сирләп, больничныйҙа булһа, икенсеһе дежур көнөндә саҡырыу буйынса фатирҙар буйлап йөрөргә мәжбүр. Шулай итеп, йәмғеһе - бер, ә инде юлың уңып, врачың больничный йә отпускыһынан сыға икән - ике кабинетта ауырыуҙар ҡабул ителә. Ә бына участка терапевы йә булмаһа башҡа берәй белгескә эләгеүе үҙе бер оҙо-о-он тарих ул. Шуныһы әкәмәт: врачҡа яҙылыу өсөн кәмендә ике аҙнанан алып бер нисә ай (ревматологҡа, мәҫәлән) алдан шылтыратырға тейешһең, ә бит сирләп китерен кем генә алдан белһен инде! Беҙҙәм яҙылыу регистратураһы "уйлап" сығарыуҙың әллә ни файҙаһы юҡ, ул үҙен аҡламаны, тип әйткем килә шуның өсөн. Элек, исмаһам, иртәрәк тороп килеп, "тере" сиратҡа баҫһаң, шул көндө үк врачҡа күренергә була ине. Ә хәҙер сираттарҙа буталыш ҡына тыуҙы: унда алдан яҙыла алмаһа ла ҡапыл сирләп китеүселәр ҙә, әҙер анализдары менән ҡабаттан күренергә килеүселәр ҙә, әлеге "берҙәм" селтәр аша яҙылыусылар ҙа һәм башҡалар ҙа теҙелешеп ултыра. Кем ҡасан врачҡа инә: шау-шыу, талаш ҡубып китә, сөнки алдан яҙылған кеше билдәләнгән ваҡытына инергә тырыша, ә "тере" сират үҙенекен ҡайыра... Уларҙан башҡа температура менән килеүселәр, ғәриптәр ҙә тәүҙәрәк инергә ынтылып тора - бындай ерҙә 1-2 сәғәт сиратта ултырыу ҙа бик хәүефле, айырыуса кемдең йөрәге, нервылары ҡаҡшаған, ҡан баҫымы юғары...

Ә бына миллионлы баш ҡалабыҙҙа быуын сирҙәре менән яфаланыусыларҙы ни бары... бер генә ревматолог ҡабул итеүе, ғөмүмән, башҡа һыйырлыҡ түгел! Мин бында Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник больницаһын иҫәпкә лә алып тормайым, сөнки Өфөлә йәшәгәндәр унда бер нисек тә эләгә алмаясаҡ (әйтерһең дә, өфөләләр айырым дәүләттә йәшәй). Мин нисек итеп бер ай буйына ревматологҡа яҙылырға маташыуым хаҡында һөйләп китергә теләйем. Тәүге тапҡыр шылтыратҡанда (унда эләгеүе лә - проблема, сәғәттәр буйы телефон төбөндә ултырырға кәрәк), оператор, был айға яҙылыу бөттө, кесаҙна иртәнге 7:30-ҙа киләһе айға яҙылыу өсөн шылтыратығыҙ, тип трубканы һалды. Кесаҙна шылтыратҡас, мине врачҡа яҙылыр өсөн сиратҡа ғына яҙып торҙолар. Берәр аҙнанан сираттың нисек шылыуы хаҡында белешергә ҡуштылар. Тағын шылтыратҡас, яҙылыу өсөн сиратта тораһығыҙ, белешеп тороғоҙ, тип ҡабатланылар. Артабан да телефон аша бындай "бесәй-сыҫҡан" уйынына минең теләк тә ҡалманы, ваҡыт та булманы... Бына шулай итеп, ауырыуҙы нисек тә түләүле медицина хеҙмәтенә йәлеп итеү генә түгел, мәжбүр итәләр. Ярай ҙа бит, был 300-400 һум тирәһе булһа. Юҡ шул, 13-сө больницаның ревматология бүлеге табиптарына бер күренеү белгестең квалификацияһына ҡарап, 700-900 һум (!) тора. Өҫтәүенә, ул анализдар тапшырыуға йүнәлтмә бирә, уныһы ла, әлбиттә, түләүле. Бынан тыш, аллерголог, иммунолог, гастроэнтеролог, эндокринолог кеүек айырым белгестәргә лә бушлай яҡын да барып булмай. Әйткәндәй, улары ла дефицит белгестәр.

Ошолар айҡанлы республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығына һорау бирге килә: унда ошо проблемалар хаҡында беләләрме икән? Әлбиттә, был өлкәлә мәсьәләләр күп, ләкин табиптарға тырышып-тырышып эш хаҡын күтәрәләр икән, халыҡҡа медицина хеҙмәте күрһәтеү сифаты ла күтәрелергә тейеш түгелме ни һуң?

Фәриҙә ИШБИРҘИНА.

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

ИҢ ЗЫЯЛЫ ГӘЗИТ!

Республикабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарында милли матбуғат баҫмалары айырым урын алып тора. Шулай ҙа улар араһында иң рухлы гәзит - ул "Киске Өфө". Унан төрлө һорауҙар буйынса фәһемле мәғлүмәт алырға мөмкин.

Миңә бигерәк тә әхлаҡ, тәрбиә, әҙәбиәт, мәҙәниәт, ауыл тормошо тураһындағы материалдар оҡшай. Ә башватҡысҡа килгәндә инде, ғаиләбеҙҙә гәзитте кем алдараҡ алып өлгөрә, шул уны сисергә ултыра. "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһын бигерәк тә яратам, үҙемә оҡшаған фекерҙәрҙе туплап барам. "Әсәйем лөғәте" рубрикаһы тел байлығын арттырырға ярҙам итә, ә инде халыҡ медицинаһы тураһындағы материалдарға баһа юҡ! Илдә, республикала булған хәл-ваҡиғалар ҙа үҙ ваҡытында сағылыш таба. Билдәге шәхестәр менән әңгәмәләр, халыҡ йолаларына арналған мәҡәләләр бик яратып уҡыла. Динебеҙгә арналған сығыштар ҙа бик кәрәкле һәм уны уҡығандарҙың күңеленә иман нуры йоҡмай ҡалмайҙыр.

Минеңсә, "Киске Өфө" - бөтә ғаилә менән рәхәтләнеп уҡый торған гәзит ул. Дөйөмләштереп әйткәндә, аңлы, уйлы, битараф булмаған кешеләр уҡый торған иң "интеллигент" гәзит тип әйтер инем уны.

Фирүзә АБДУЛЛИНА,
Ҡырмыҫҡалы районы.

СӘМЛЕГӘ СӘМ БИРӘ

Салауат районында йәшәгән осорҙа "Киске Өфө" гәзите тураһында хәбәрҙәр түгел инем. Эш буйынса баш ҡалаға күсеп килгәс кенә уның тураһында ишетеп ҡалдым, унда ла әле уны өфөләләр өсөн баҫылған "Вечерняя Уфа" атамалы мәғлүмәти гәзиттең башҡортсаға тәржемәһелер, тип уйланым.

Бағтиһәң, "Киске Өфө" мәғлүмәт кенә еткереүсе рус телендәге гәзиткә бер нисек тә оҡшамаған икән! Уның үҙ стиле, үҙ фекере бар, һәр мәҡәләһе аша уйлыға- уй, сәмлегә - сәм, ғәмлегә ғәм ташлаусы гәзит булып сыҡты. Бөгөн минең өсөн "Киске Өфө" һәр ваҡыт өҫтәлемдә ята торған, башҡорт теле дәрестәрендә мотлаҡ ҡулланылырға тейеш кәрәкле әсбапҡа әүерелде. Бына ете йыл дауамында был гәзиттең һәр битен ентекләп уҡып барам, бигерәк тә "Монолог", "Диалог" рубрикаларында донъя күргән башҡорт милләтенең билдәле шәхестәре, зыялылары, милләт рухын һаҡлап килгән ағинәйҙәр, аҡһаҡалдарҙың үҙ-ара фекер алышыуын, тормош һабаҡтарын, матур уй-ниәттәрен, йәштәргә еткерер һүҙҙәрен уҡып һоҡланам. Гәзит биттәрендә һәр ваҡыт башҡорт донъяһы өсөн актуаль яңғыраған мәсьәләләр күтәрелеүе, уларға ҡарата милләттәштәремдең фекерен уҡып белеү миңә оло кинәнес килтерә.

Ф. НИҒМӘТОВА,
Өфөләге 123-сө лицейҙың башҡорт теле уҡытыусыһы.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан 2013 йыл йомғаҡтары буйынса власть органдары эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеген баһалау күрһәткестәре менән Рәсәйҙең иң яҡшы субъекттары иҫәбенә инде. Өс йыл эсендә иҡтисади үҫеш кимәле һәм динамикаһы буйынса лидерҙар - Башҡортостан, Татарстан, Саха (Яҡут) республикалары, Краснодар крайы, Түбәнге Новгород һәм Һамар өлкәләре. Һөҙөмтәлелек рейтингы тураһында доклад Хөкүмәткә 15 августа тиклем тапшырыласаҡ һәм 15 октябргә тиклем раҫланасаҡ. Шунан һуң лидер төбәктәр араһында 3,5 миллиард һумлыҡ граттар бүленәсәк.

✓Мәскәүҙә Рәсәйҙең заманса тарихы музейында "Йылдың иң яҡшы китаптары" XXIII бөтә Рәсәй конкурсы йомғаҡтары буйынса бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Конкурс йомғаҡтары буйынса "Иң яҡшы классик художество әҙәбиәте баҫмаһы" номинацияһында "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы баҫмаһы еңеүсе булды. Бынан тыш, "Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн иң яҡшы китап" номинацияһында Рәсәй Китап нәшер итеүселәр ассоциацияһының дипломы менән Зәйнәб Биишеваның "Һөнәрсе менән өйрәнсек" китабы баҫмаһы билдәләнде. Был миҙгел конкурсында бөтә Рәсәй төбәктәренән 170 нәшриәт, шулай уҡ сит илдәрҙең рус телле нәшриәттәре ҡатнашты. Конкурсҡа 548 баҫма тәҡдим ителде.

✓РФ Мәғариф һәм фән министрлығы федераль бюджет иҫәбенә Ҡырым сығарылыш уҡыусыларын уҡытыуға контроль ҡабул итеү һандарын раҫланы. М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, республиканың башҡа юғары уҡыу йорттары кеүек, Мәғариф һәм фән министрлығы өҫтәмә бюджет урындары бүлгән Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттары иҫәбенә инде. Башҡорт дәүләт педагогия университетына инеүсе Ҡырым абитуриенттары 18 бюджет урынға дәғүә итә ала.

✓Башҡортостанда география һәм әҙәбиәт буйынса беренсе Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре билдәле булды. Географияны 1259 кеше тапшырған, уларҙың 140-ы минималь 37 балды йыя алмаған. Уртаса балл 53,6 тәшкил итә. Биш сығарылыш уҡыусыһы эштәрен 100 балға яҙған. 932 уҡыусы әҙәбиәт буйынса тест яҙған. 68 кеше ыңғай билдә алыу өсөн 32 балл йыя алмаған. Бында уртаса балл 51,7-гә тиң. 100 балға бер кем дә тапшыра алмаған.

“Башинформ”дан.

✓ *Беҙ үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙан, боронғо тарихыбыҙҙан оялырға тейеш түгелбеҙ. Тарихсылар Боронғо Өфө территорияһында биш ҡала булыуын билдәләй һәм улар рәсми теркәлгән. Уларға 1500 - 2000 йыл.*

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

БӨГӨНГӨ ДОНЪЯ...

ҙур бер ауыл кеүек

1990 йылдың 12 июнендә РСФСР-ҙың Халыҡ депутаттары съезында Рәсәйҙең Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителә. Был документ СССР-ҙағы союздаш республикаларҙың бер-бер артлы үҙҙәренең бойондороҡһоҙлоғо хаҡында суверенитет иғлан итеүе шарттарында төҙөлә. Рәсәй суверенитетының сәйәси-фәлсәфәүи аспекттары менән тарих фәндәре кандидаты Илфат СӘМСИТДИНОВ таныштыра.

- Глобалләшеү шарттарында ниндәй ҙә булһа дәүләттең суверенитеты хаҡында һөйләү сетерекле мәсьәлә, әлбиттә. Сөнки дәүләттәр араһында төрлө өлкәләрҙә бәйләнештәр урынлаштырылған һәм күп осраҡта был бәйләнештәр дәүләт сиге менән генә сикләнмәй. Шуға күрә тулы бойондороҡһоҙлоҡ хаҡында һөйләгәндә лә уның шартлы икәнен билдәләп китергә кәрәктер. Бөгөнгө донъя ҙур бер ауыл кеүек, уның бер яғында булған ваҡиғалар тиҙ арала уның икенсе яғында сағылыш таба. Коммуникация сараларының, тәү сиратта, интернеттың өлөшө ҙур бында. Шуға күрә лә халыҡ-ара кимәлдәге иҡтисади һәм сәйәси бәйләнештәр, бер яҡтан, һәр дәүләттең үҙ мәнфәғәттәрен өҫтөн ҡуйырға тырышыуына, икенсе яҡтан, ваҡыты менән киҫкен ҡаршылыҡтарға алып килде. Халыҡ-ара корпорациялар, ҙур ойошмалар дәүләттең ҡайһы бер функцияларын үҙ ҡарамағына алды, был, үҙ сиратында, илдең суверенитеты, тигән төшөнсәне сикләүгә килтерҙе.

Бөгөн Рәсәй суверенитеты тарихына байҡау яһаһаҡ, шуны күрәбеҙ: СССР-ҙың тарҡалыуы һөҙөмтәһендә РСФСР сиктәрендә барлыҡҡа килгән яңы илдең үҫеүе, дәүләт булып формалашыуы ҡапма-ҡаршылыҡтар аша бара. Беренсенән, Рәсәй Федерацияһы суверенитеты төшөнсәһе лә, үҙаллылыҡты билдәләгән төп закон - Конституцияның ҡабул ителеү тарихы ла, уның айырым пункттары ла күп һорауҙар тыуҙыра. Быны танырға кәрәк. 1993 йылда ҡабул ителгән Конституцияла етешһеҙлектәр етерлек, ундағы закондарҙың ҡайһы берҙәре хатта "суверенитет" тигән төшөнсәгә ҡаршы килә. Был уның ҡыҫҡа ваҡыт эсендә яҙылыуында һәм был процеста икенсе дәүләттәрҙең консультанттары әүҙем ҡатнашыуы менән дә аңлатыла. Шуға күрә лә бик күптәр Рәсәйҙең тулы суверенитетҡа эйә булмауы хаҡында фекерҙәр яңғырата.

Суверенитет - ул дәүләттең эске һәм тышҡы эштәрҙә, юридик мәсьәләләрҙә бойондороҡһоҙ булыуы, башҡа илдәргә буйһонмауы. Шулай уҡ уны билдәләгән айырым факторҙар ҙа бар. Мәҫәлән, шул факторҙарҙың береһе - дәүләттең үҙ идеологияһы булыуы. Әммә РФ Конституцияһына ярашлы, беҙҙең илдә дәүләт идеологияһын урынлаштырыу тыйыла. Тимәк, был йәһәттән беҙ бойһондороҡһоҙ дәүләт түгел, тип әйтергә була. Шулай уҡ иҡтисад (Үҙәк банк системаһының ҡоролошонан башлап), халыҡ-ара сәйәсәт өлкәһенә ҡараған Конституция пункттарында ла бойондороҡһоҙлоҡта шикләнергә сәбәп биргән урындар бар. Улар Рәсәй үҙаллылығы ла шартлы булыуына ишара яһай. Һуңғы йылдарҙа ошо етешһеҙлектәрҙән ҡотолоу, ҡотолоуға саҡырыу менән билдәләнгән ыңғай тенденцияны ла күрергә була.

(Дауамы 5-се биттә).

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

Дүрт датаны - Рәсәй көнө, Ҡала көнө, Матбуғат көнө һәм Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыуҙы берләштергән байрам саралары алдынан Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов журналистар өсөн ғәҙәти булмаған матбуғат конференцияһы үткәрҙе. Сәй табыны янында барған һөйләшеүҙе шартлы рәүештә "Мэр менән иртәнге аш" тип тә атарға мөмкин ине. Әлбиттә, бындай мөхит үҙе үк көсөргәнеште кәметә һәм дуҫтарса аралашыу мөмкинлеген арттыра, шулай ҙа аш - аш урынында, эш - эш урынында.

ДҮРТ ЙӨҘ ҘӘ ҠЫРҠ ЙЫЛ...

Өфөгәме, әллә Өфө ҡәлғәһенәме?

Һөйләшеү рәсми булмаған шарттарҙа үтһә лә, барыбер ҙә рәсми һандарға мөрәжәғәт итмәй булмай. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, беренсе майға ҡарата Өфө ҡалаһы бюджетына 5 миллиард 156 миллион һум аҡса (115,8 процент) ингән. Шуларҙан үҙкилем 3 миллиард 603 миллион һум тәшкил итә. Ғөмүмән алғанда, өс йыл рәттән бюджет килеме арта бара. Бында үҙкилем дә, республика ярҙамы ла күҙәтелә. Бюджеттың сығым өлөшө - 6 миллиард 507 миллион һум. Былтырғы кимәл менән сағыштырғанда, 10 процентҡа күберәк. Иҡтисадтың аныҡ секторындағы динамикалы үҫеш эш хаҡы артыуына ыңғай йоғонто яһай. Эре предприятиеларҙа һәм ойошмаларҙа эшләүселәрҙең уртаса айлыҡ эш хаҡы ғинуар-майҙа 32 мең 870 һумға еткән. Был шулай уҡ былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 8,2 процентҡа күберәк.

Йылдың беренсе кварталында йәлеп ителгән инвестицияларҙың дөйөм күләме 3,1 млрд һумға еткән. Был былтырғы ошо осор күрһәткесенән 7 процентҡа күберәк. Әлеге ваҡытта ҡала территорияһында дөйөм хаҡы 167 миллиард һум самаһы тәшкил иткән 102 проект тормошҡа ашырыла. Улар дөйөм алғанда 19 мең эш урыны булдырырға тейеш. Өҫтәүенә, тағы ла 52 проект эшләнеү өҫтөндә һәм уның дөйөм инвестиция күләме 54 миллиард һум тәшкил итә. Улар тағы ла өҫтәмә рәүештә 5 мең эш урыны булдырасаҡ. Инвестицион проекттарҙың тормошҡа ашырылыуының ыңғай яғын эшһеҙлек буйынса рәсми рәүештә теркәлеүселәр һанының кәмеүе лә асыҡ күрһәтә: ул былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 802 кешегә кәмеп (11,8 процент), 6006 кеше ҡалған. Баш ҡаланың халыҡты эш менән тәьмин итеүсе ойошмаларында 1 июнгә ҡарата 21 915 вакансия теркәлгән. Былтыр был ваҡытта 12 мең вакансия булған. Хеҙмәт баҙарында эш тәҡдим итеүселәрҙең ҡырҡа артыуы ҡала иҡтисадының үҫешен тағы бер тапҡыр раҫлай.

Йыл башынан алып биш айҙа 158 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлөп, былтырғы күрһәткесте 1,5 процентҡа үтеп киткән. Барлығы 2011 - 2013 йылдарҙа Өфөлә 14 проблемалы йорт (алданған өлөшсөләр) төҙөлөшө тамамланған. Быйыл шундай 4 йорт төҙөлөшөнөң тамамланыуы планлаштырыла. Республика Хөкүмәте ярҙамы менән был мәсьәлә системалы хәл ителә һәм 2015 йылдың тәүге яртыһында был проблемаға нөктә ҡуйылыр тигән өмөт бар.

"Беҙ - алты йыл дауамында халыҡ үҫеше буйынса ыңғай динамикалы берҙән-бер миллионлы ҡала. Тыуым һаны үлем күрһәткесенән юғарыраҡ, - тип белдерҙе ҡала мэры. - Шулай уҡ халыҡ һаны үҫеүгә миграция сәйәсәте лә йоғонто яһай. Был йәһәттән икенсе йыл рәттән Волга буйы һәм Урал федераль округтарынан баш ҡаланы даими йәшәү урыны итеп һайлап, күсенеп килеүселәр һаны арта. Мәғлүм булыуынса, бынан өс йыл элек "Өфө ҡалаһы - лайыҡлы йәшәү ҡалаһы" тигән лозунг ташлағайныҡ. Тимәк, был буш саҡырыу ғына булмаған, ә ғәмәлдә эшләй һәм халыҡ үҙенә лайыҡлы йәшәү урынын һайлай. Сөнки ҡалала төҙөкләндереү, уңайлы шарттар булдырыу буйынса күп эшләнә. Иң мөһиме - эре һәм урта бизнес дирәһендә ҡайнаусыларҙың аңында ҡырҡа үҙгәреш булып, улар теге йәки был объект төҙөгәндә уның тирә-яғын төҙөкләндереүгә лә аҡса йәлләмәҫкә кәрәклеген аңланы. Әлеге ваҡытта инвесторҙар ҡала хакимиәте менән берлектә ҡала инфраструктураһын үҫтереүҙә әүҙем ҡатнаша".

Байрам тантанаһын баш ҡала шундай һәм башҡа бик күп өлкәләрҙә ыңғай күрһәткестәр һәм үҫеш менән ҡаршылай. Һәм, әлбиттә, мөмкинлектән файҙаланып, Ирек Ишмөхәмәт улы даими рәүештә һыҙыҡ өҫтөнә алған фекерен тағы бер тапҡыр ҡабатланы: "Ҡала көнө, тиһәк тә, Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың 440 йыллығын байрам итергә әҙерләнәбеҙ. Был дата рәсми юбилей түгел, шулай ҙа матур сара ойошторасаҡбыҙ. "Ни өсөн Өфө ҡалаһының түгел, ә Өфө ҡәлғәһенең 440 йыллығы?" - тигән һорауҙар һәм ошо тема буйынса бәхәстәр күп булды. Тағы бер тапҡыр шуға иғтибарығыҙҙы йәлеп итәм: беҙ үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙан, боронғо тарихыбыҙҙан оялырға тейеш түгелбеҙ. Тарихсылар Боронғо Өфө территорияһында биш ҡала булыуын билдәләй һәм улар рәсми теркәлгән. Уларға 1500 - 2000 йыл. Өфө ярымутрауында кешеләр борондан йәшәгән. Аҫаба башҡорттарҙың бында килеүе XI быуаттар сигендә теркәлә. Һәм беҙ бөгөн бер нисә теория йәшәүен, хәҙерге Өфөгә ысынлап та нисә йәш булыуын асыҡлау өсөн ошо һәм уның яҡын-тирәһендәге территорияла күп эштәр башҡарырға бурыслы икәнебеҙҙе аңларға тейешбеҙ.

Ата-олатайҙарыбыҙҙың, Рычковтың тикшеренеүҙәрендә ҡала-ҡәлғәгә нигеҙ һалынған 1574 йылда Иҫке Өфө урынында ҙур төркиҙ ҡалаһы, уның урындағы халыҡ өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булыуы билдәләнә. XVIII - XIX быуаттарҙа Өфө ҡалаһы территорияһынан бик күп артефакттар Санкт-Петербугҡа ебәрелеүе бер кемгә лә сер түгел. Шуға күрә, ғалимдарҙың, белгестәрҙең оҙайлы бәхәсенән һуң, был датаны Өфө ҡәлғәһенең юбилейы итеп үткәрергә ҡарар ителде".

ШУЛАЙ ИТЕП...

Ҡала башлығы вазифаһын, ниһайәт, тарихҡа битараф булмаған, уны белгән, уға ихтирам менән һәм һаҡсыл ҡараған кешенең биләүе ҡыуандыра. Ләкин тарих менән бәхәскә инергә тырышыусылар ҙа юҡ түгел: ҡала урамдарындағы рекламаларҙа һаман да "Өфөгә - 440 йыл" тигән яҙыуҙар эленеп тороуын дауам итә...

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ БР Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты Башҡортостандың иң һөҙөмтәле ведомствоһы тип танылды. Алдынғы биш ведомство исемлегенә шулай уҡ Мәҙәниәт министрлығы, Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы һәм Мәғлүмәти технологиялар буйынса агентлыҡ инде. Рейтингтың түбәнге өлөшөндә Туризм буйынса агентлыҡ (22-се урын), Тарифтар буйынса дәүләт комитеты (21-се) һәм БР Дәүләт заказдарын урынлаштырыу буйынса дәүләт комитеты (20-се) урынлашты.

✓ Мәләүез районының "Һуҡайлы" ауыл хужалығы етештереү кооперативы механизаторы Илдар Ишекәев 2-7 июндә Суздалдә үткән ер һөрөү буйынса III асыҡ Рәсәй чемпионатында ҡатнашып, дүртенсе урын яуланы. Тупраҡ эшкәртеүҙә оҫталыҡ буйынса конкурста Рәсәйҙең 40 төбәгенән иң яҡшы механизаторҙар ҡатнашты.

✓ Өфөнөң "ВДНХ-Экспо" күргәҙмә комплексында Interfest-2014 Халыҡ-ара франшизалар һәм бизнес-бәйләнештәр фестивале асылды. Унда 15-тән ашыу франчайзинг бренды тәҡдим ителгән. Фестивалдең маҡсатлы аудиторияһы - бәләкәй һәм урта бизнес вәкилдәре. Сараға Өфөнән, Алматынан, Мәскәүҙән, Екатеринбургтан, Түбәнге Новгородтан, Ҡазандан, Түбәнге Каманан, Яр Саллынан, Стәрлетамаҡтан, Салауаттан, Нефтекаманан 500-ләп вәкил ҡыҙыҡһыныу белдерҙе.

✓ Өфө дәүләт нефть техник, Башҡорт дәүләт һәм Өфө дәүләт авиация университеттары "Эксперт РА" рейтингтар агентлығы төҙөгән, йыл һайын уҙғарылып килгән Рәсәйҙең йөҙ университеты рейтингында үҙ күрһәткестәрен яҡшыртҡан. Өфө дәүләт нефть техник университеты хәҙер 47-се урынды (2013 йылда 52-се урында) биләй, Башҡорт дәүләт университеты - 88-се урында (106-сы), ә Өфө дәүләт авиация университеты - 89-сыла (90-сы). Өсөнсө йыл рәттән рейтинг еңеүсеһе - М.В.Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты.

✓ Прагала Халыҡ-ара шашка буйынса Европа чемпионаты булып үтте һәм унда биш тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина, донъя чемпиондары Айгөл Иҙрисова, Муродолло Амрилаев һәм Айнур Шәйбәков ҡатнашты. Ҡатын-ҡыҙҙар чемпионатында Тамара Танһыҡҡужина - икенсе, Айгөл Иҙрисова дүртенсе урын яуланы.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

ТӘНҠИТТӘН ҚУРҠЫРҒА ЯРАМАЙ...

"Журфест" һығымтаһы шулай

Дүртенсе йыл рәттән Башҡортостан Республикаһының матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары журналистары һөнәри байрамын мәшәҡәтле эштәренән ситкә китеп, сәхрәлә ҡаршылай. Быйыл "Журфест" Ҡырмыҫҡалы районының Тауһеңер ауылы эргәһендәге киң туғайҙа үткәрелде.

Журналистар һабантуйы уҙғарыласаҡ биләмәгә килеп инеү менән редакцияларҙың тиҙ арала ҡороп ҡуйған палаткалары, улар эргәһендә һәр баҫманың йәки радио, телевидение каналының эмблемаһы төшөрөлгән, девизы яҙылған елгә елберләп торған әләмдәре күҙгә ташланды. Республиканың ҡала һәм райондары редакцияларының журналистары Тауһеңер яланына фестивалде асыу тантанаһына йыйылғанда уҡ көн ҡыҙыҡлы һәм йөкмәткеле буласағын һиҙемләргә мөмкин ине. БР-ҙың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов та ошо тойомлауға йомғаҡ яһағандай итеп: "Беҙҙең республика Рәсәйҙә иң күп гәзит-журналдар уҡыусы төбәк һанала, беҙҙең телеканал илдә иң яҡшыларының береһе. Мин уйлауымса, беҙгә Рәсәй буйынса һәр ваҡыт бөтөн күрһәткестәр буйынса алдынғы урындар биләүҙе, иң мөһиме - үҙебеҙ халыҡҡа яҡын булыуҙы теләргә кәрәк. Сөнки район һәм ҡала гәзиттәре халыҡҡа мәғлүмәт еткереүсе төп сығанаҡ булып тора. Беҙ бөгөн алған хис-тойғолар, яңы белемдәр һәм танышлыҡтар арҡаһында күпкә аҡыллыраҡ, белемлерәк, байыраҡ булырбыҙ, тип ышанам",- тип йомғаҡланы сығышын Борис Николаевич. "Спорт рекордтарынан - ижади еңеүҙәргә табан!" девизы аҫтында үткән "Журфест" һөнәри байрамдарын билдәләүселәрҙең ни тиклем тынғыһыҙ, һәр ерҙә беренселеккә ынтылыусан, сәмле булыуын тағы бер ҡат раҫланы. Шахмат, арҡан тартышыу, ҡолғаға менеү, ҡул көрәше һәм башҡа мауыҡтырғыс һабантуй уйындары бер тынала үтте. Волейбол һәм футбол уйындары ғына ярты көн дауамында барҙы. Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзите коллективының волейбол йыйылма командаһы йәмғеһе ун бер командаһы артта ҡалдырып, беренсе урын яуланы. Яңы ғына ҡулдарына диплом алып эш башлап торған йәш журналистар менән бер рәттә күптән билдәлелек яулап, халыҡ араһында үҙ тыңлаусыларын, уҡыусыларын табып өлгөрөүселәр ҙә, етәксе вазифаларҙа эшләүселәр ҙә спорт ярыштарында ихлас ҡатнашты. Уйын-көлкө иң ҡатмарлы ижтимағи-сәйәси, иҡтисади, һөнәри мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеү, фекер алышыу, кәңәшләшеү менән аралашып барҙы. Журналистиканың төрлө өлкәләрендә эшләүсе коллегалар бергә йыйылыуҙан файҙаланып, быйыл тәүге тапҡыр Матбуғат клубы ойоштороло. Унда Ҡырымдың Рәсәй менән ҡушылыуына бәйле яңы сәйәси ысынбарлыҡ, интернет-технологиялар менән үҙ-ара эш алып барыу мәсьәләләре тикшерелде. Көнө буйы мыжғып йөрөгән халыҡты күҙәтеп арыған ҡояш байыр мәлдә Башҡортостан Республикаһының Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов ҡатнашыусыларҙы һөнәри байрамдары менән тәбриклә килде. Сығышында ул киң мәғлүмәт саралары менән идара итеү, власть һәм журналистар мөнәсәбәте темаларына ҡағылышлы уйҙарын еткерҙе: "Беҙ фекерҙәштәр, сөнки беҙ тормошто яҡшыртыу өсөн эшләйбеҙ. Ҡайһы саҡта ҡәтғи булыуығыҙҙы ла һорайым. Власҡа ҡарата тәнҡит һүҙе әйтеүҙән, эҙәрлекләүҙән ҡурҡмағыҙ. Мин етәкселек иткән саҡта һеҙҙе был күңелһеҙлектәр борсомаясаҡ", - тип ышандырҙы Рөстәм Зәки улы.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Ысын мәғәнәһендә ирекле һәм ҡыйыу мәғлүмәт саралары хәҙерге заманға башҡа ваҡытҡа ҡарағанда ла нығыраҡ кәрәктер, сөнки тап ошо һөнәр эйәләре кешелектең фекерен һәм кәйефен формалаштыра, йәмғиәткә әхлаҡи, сәйәси йүнәлеш бирә. Журналистарҙың һөнәри байрамдары уңайынын ҡорға йыйылып, үҙ-ара аралашыу, киләсәккә маҡсаттар билдәләү йолаһы милли матбуғатыбыҙҙы тағы ла юғарырыҡ үрҙәргә әйҙәһен.

Камилә ҒӘЛИЕВА.

Артур Батыршин фотоһы.

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

БӨГӨНГӨ ДОНЪЯ...

ҙур бер ауыл кеүек

(Башы 4-се биттә).

Икенсе мөһим нәмә - хоҡуҡи дәүләт мәсьәләһе. Хоҡуҡи дәүләт тип закон бөтә ҡатламдарға ла берҙәй ҡулланылған, кеше хоҡуҡтары закон менән нығытылған, суд системаһы бойһондороҡһоҙ булған дәүләтте әйтәләр. Бындай дәүләттә ҡанундар айырым кеше һәм бар халыҡ мәнфәғәтендә ҡабул ителә. Рәсәйҙең хоҡуҡи дәүләт булыуы хаҡында СССР тарҡалғандан һәм 1993 йылдағы путчтан һуң һөйләй башланылар. Власть кеше хоҡуҡтарын яҡлаған Конституция вәғәҙә итте. "Кеше хоҡуҡтары хаҡында декларация", "Балалар хоҡуҡтары хаҡында декларация" кеүек актлар ҡабул ителде. Шуны билдәләргә кәрәк, 90-сы йылдарҙың беренсе яртыһы өлгөһөндәге Рәсәй хөкүмәте ҙур еңеллек менән төрлө закон актлары ҡабул итте. Шул уҡ ваҡытта был актларҙы финанс яҡтан нығытыу мәсьәләһен дә, уларҙың тормошҡа ашырылыу механизмын да хәстәрләмәне. Һөҙөмтәлә бик күп аңлашылмаусанлыҡтар, ҡаршылыҡтар килеп тыуҙы, "хоҡуҡи дәүләт"те тормошҡа ашырыу ҙа ҙур проблемаға әйләнде. Әлеге ваҡытта власть илдең граждандарына ла, донъя йәмғәтселегенә лә Рәсәйҙең юридик яҡтан ғына түгел, фактик яҡтан да хоҡуҡи дәүләт икәнлеген иҫбатларға тырыша тырышыуға. Әлеге мәлдә, бер яҡтан, үҙенең теләктәре тап закондың үҙе икәнен иҫбатларға тырышҡан власть (бигерәк тә урындарҙағы), икенсе яҡтан, власть структураларына закон бөтәһенә лә бер икәнен иҫбатлаған граждандар, өсөнсө яҡтан, "гонаһтан йырағыраҡ" тигән позиция алып, нейтралитет һаҡлаған халыҡ ҡатламдарын күҙәтергә мөмкин. Тәүгеләр өҫтөнлөк иткәндә дәүләттә бер ни ҙә үҙгәрмәйәсәк һәм закон айырым ҡатламдар мәнфәғәтендә генә ҡулланыласаҡ, хоҡуҡи дәүләт хаҡындағы пландар хыял ғына булып ҡаласаҡ. Әҙҙем ҡарашлы граждандарҙың булыуы дәүләттәге закондарҙың дөрөҫ, бөтәһенә лә берҙәй үтәлеүенә булышлыҡ итәсәк. Ләкин нейтралитет һаҡлап торған халыҡ ҡатламының позицияһы ҙур ролде уйнаясаҡ, тап уларҙың артабанғы әүҙемлегенән беҙҙең хоҡуҡи дәүләттә йәшәү-йәшәмәүебеҙ тора ла инде.

Шулай итеп, суверенитет ул шартлы төшөнсә, бөгөнгө көндә бер ниндәй дәүләт тә тулы үҙаллылыҡ хаҡына башҡа донъянан айырымланып йәшәй алмай, был сәйәси, иҡтисади, социаль ҡыйынлыҡтарға килтерәсәк. Теләһең дә, теләмәһең дә, халыҡ-ара нормаларҙы үтәү мөһим. Ләкин шул уҡ ваҡытта үҙ йөҙөндө һаҡлау ҙа мөһим роль уйнай. Икенсенән, үҙенде хөрмәт итһендәр өсөн башҡаларҙы, уларҙың суверенитетын да хөрмәт итергә кәрәк. Ысынлап та, икенсе дәүләттәрҙең эске эшенә ҡыҫылмау - халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙең төп принциптарының береһе булып ҡала. Суверенитет (ниндәй генә формала һәм ниндәй генә миҡдарҙа булмаһын) һәр дәүләттең айырылғыһыҙ атрибуты ул. Ул дәүләт менән барлыҡҡа килә һәм дәүләт менән бергә юғала, уны сикләргә ярамай. Эйе, халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙең үҫеүе, яңы кимәлгә сығыуы дәүләттәрҙең бәғзе бер эске эштәрен ҡыҫырыҡлай, әммә был ҡыҫырыҡлауҙар иректеҙ рәүештә барлыҡҡа килә һәм улар халыҡ-ара бәйләнештәрҙе нығытыуға булышлыҡ итә. Донъя нормаларын хөрмәт иткән һәм үҙен хоҡуҡи дәүләт исемлегенә индергән ил генә башҡа дәүләттәрҙең бойондороҡһоҙлоғона, бөтөнлөгөнә дәғүә итә алмай. Рәсәй ҙә ошо дөйөм ҡағиҙәгә буйһона.

Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Ҡурай еләге

❖ Лимфа төйөндәре ауыртһа, температура бик юғары булһа, урманда үҫкән ҡурай еләгенең тамыры файҙалы. 0,5 кг йыуып киптерелгән тамырҙы балсыҡ һауытҡа бер ҡатлам тамыр, бер ҡатлам шәкәр менән ҡатлап һалаһың. 0,5 кг тамырға 1 кг шәкәр ҡомо йәки 0,5 кг яҡшы сифатлы бал кәрәк. 1 тәүлектән һуң әлеге балсыҡ һауытты 8 сәғәткә "һыу мунсаһы"на ултыртып төнәтергә. Һуңынан тағы 2 көн төнәтергә һәм һөҙөргә. Килеп сыҡҡан һутты 14 йәшкә тиклемге балаларға көнөнә 5 мәртәбә 1-әр балғалаҡ, ололарға 5 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә. Ашар алдынан эсеү күпкә файҙалыраҡ. Дауаланыу ваҡыты 1 көндән 12 көнгә тиклем. Унан һуң шул тиклем үк ваҡытҡа ял итеп алырға.

Балаға һалҡын тейһә

❖ 1 балғалаҡ киптереп ваҡланған әнис орлоғона 1 стакан ҡайнап сыҡҡан һыу өҫтәргә лә, 30 минут төнәтергә. Ашар алдынан көнөнә 3 мәртәбә яртышар стакан эсергә.

Ҡан баҫымын төшөрөү

❖ 1-әр ҡалаҡ бал, сөгөлдөр, кишер һуты, ҡырылған керәнде 36 сәғәт төнәтеп, 1 лимон һутын ҡушырға ла, көнөнә 2 мәртәбә, ашарҙан 1 сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 1,5 ай.

Үксәләр ярылғанда

❖ Бигерәк тә йәй үксәләр ярылып йонсота. Аяҡтарҙы яҡшылап һыу боҫонда тотоп алығыҙ. Алдан һуған ҡабығын бер аҙ ҡайнатып, яңы ғына йыйылған һәм ваҡланған юл япрағы ҡушырға (тигеҙ күләмдә), килеп сыҡҡан ҡатнашмаға 1-әр балғалаҡ үҫемлек майы, бал ҡушырға һәм он һалып, ҡамыр баҫырға. Ҡамырҙы йәйеп, ауыртҡан урынға ҡуйырға һәм бинт менән бәйләргә.

Лимфолейкоз

❖ 25-әр грамм гөлйемеш менән мышар емешен ҡайнар һыуҙа бешереп, көнөнә 1 стакан эсергә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Бында эшләгән барлыҡ аҡсаһын Юлаев һәм уның арҡаҙаштары Палдискиҙа төҙөлгән православие сиркәүенә хәйер итеп биргән. Ул хәҙер Изге Георгий Победоносец ҡорамы тип атала.*

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

ҠУНАҠСЫЛЛЫҠ

Башҡорттарҙа борондан ҡунаҡсыллыҡ институты юғары үҫешкән. Бер-береңә ярҙам ҡулы һуҙыу, юлда булғандарға ризыҡ, йоҡлар урын тәҡдим итеү башҡорт өсөн мотлаҡ ҡағиҙәләрҙең береһе булған. Һуңғараҡ, Ислам дине нығыныу менән, Аллаһы Тәғәлә кеше ҡиәфәтенә инеп, уларҙы һынай, тигән ышаныу булған. Һәр ҡунаҡ, бигерәк тә сит-ят кеше, Хоҙай ҡунағы тип ҡабул ителгән.

Башҡорттарҙың көнкүреше тураһында яҙған һәр ғалим уларҙың артыҡ ҡунаҡсыллығы хаҡында яҙып ҡалдырған. "Күңел етһә, аш етә", "Ҡунаҡсыл кешенең табыны буш булмай", "Ҡунаҡ ҡайҙа, ҡот шунда" тигән мәҡәлдәр ҙә шул турала һөйләй. Килгән ҡунаҡ донъяла барған хәл-ваҡиғаларҙы бәйән итер булған, тимәк, мәғлүмәт тапшырыу каналы ролен дә үтәгән.

"Башҡортостан буйлап ҙур Мәскәү шоссеһындағы кеүек хәүефһеҙ сәйәхәт итергә була. Башҡорттар яғымлы һәм иғтибарлы халыҡ", - тип яҙған XIX быуаттың башында В. Даль. Сәйәхәтселәр һәр ауылда йәки һәр йәйләүҙә туҡтай алған. В. Зефиров "Взгляд на семейный быт башкир" тигән хеҙмәтендә башҡорт холҡондағы матур сифат - сит кешегә лә үҙ туғанына ҡараған кеүек ҡарауын һүрәтләй: "Ҡунаҡ килгәнен ишетеү менән, унан кем булыуын һорап та тормайынса, шунда уҡ ҡапҡаларын асалар".

Ҡунаҡ ҡабул итеү йолаһында ҡунаҡ - ғаилә башлығы, ҡунаҡ - ғаилә ағзалары, ғаилә башлығы - ғаилә ағзалары араһындағы мөнәсәбәттәрҙең үҙенсәлеге асыла. Үҙәк урында ҡунаҡ менән ғаилә башлығы тора. Хужа ҡунаҡҡа уң ҡулын биреп, айырыуса ихтирам күрһәтһә, ҡуш ҡуллап иҫәнләшә. Иҫәнләшеү, хушлашыу формалары ла йылдар дауамында формалашҡан һәм кешеһенә ҡарап, төрлөсә ҡулланылған. Мәҫәлән, мосолман ир-егеттәре: "Әссәләмәғәләйкүм!" тип иҫәнләшеп, "Вәғәләйкүм әссәләм!" тигән яуап алған. Йәштәштәр "Сәләм!" тип әйтә алған. Был формалар, ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙға ҡарата ҡулланылмаған. Ҡунаҡ килгәндә хужалар ашап ултырһа, "Ашығыҙ тәмле булһын!", йортта байрам барһа, "Байрамығыҙ (туйығыҙ) ҡотло булһын!", ниндәйҙер эш эшләнһә, "Эшегеҙ еңел булһын!" тигән теләк әйтелгән. Яҡшы таныштар, яңы ғына күрешкән кешеләр эйәк ҡағып һаулаша алған. Этикет буйынса, абруйлы һәм өлкән йәштәге ҡунаҡтар түргә ултыртылған, уларға шунда уҡ ҡымыҙ йәки бал тәҡдим ителгән. Хужа эсемлек һалынған ҡасаны ике ҡуллап тотоп бирергә тейеш булған. Ҡунаҡтан ниндәй маҡсат менән килгәнлеген һорамағандар, улар был турала үҙҙәре әйтергә тейеш булған. Ҡунаҡтың атын да тәрбиәләгәндәр. Ҡунаҡ ир затынан булһа, ҡатындар йорттоң аш-һыу әҙерләү өлөшөндә генә ултырған. Шулай ҙа хужа ҡатынына һәм балаларына әленән-әле ниндәйҙер эштәр ҡушып торған. Ҡунаҡҡа иң затлы ризыҡтар тәҡдим ителгән, "Үткер бысаҡ, һимеҙ ит табын ҡәҙерен килтерер", "Тау билгеһе таш булыр, бай билгеһе аш булыр", тигәндәр. Ҡунаҡ оҙаҡҡа килһә, һарыҡ һуйырға тырышҡандар. Йәмғиәттә һаран кешене өнәп етмәгәндәр, "Һаран байға төшкәнсе, йомарт ярлыға төш" тигән мәҡәл шул турала һөйләй, әммә ризыҡты исраф итеү ҙә маҡталмаған: "Ҡунаҡ башына ҡуй һуйһаң, ҡураңда ҡуйың ҡалмаҫ".

Эльза МИҺРАНОВА.
"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.
(Дауамы бар).

ЗЫЯЛЫЛАР ҠОРО

Башҡорт халҡының милли батыры, шағир-импровизатор Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыу уңайынан Башҡорт дәүләт университеты базаһында уҙғарылған "Шәхестең тарихи-мәҙәни ерлектәге роле" тип аталған Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция тап шундай фекергә этәрҙе һәм бының өсөн етди сәбәптәр ҙә булды. Дөрөҫөн әйткәндә, тәү ҡарашҡа, программаға индерелгән сығыштарҙың күплеге һәм төрлөлөгө бер аҙ аптыратҡайны ла, шикләндергәйне лә. Әммә бер-бер артлы трибуна артына сығыусыларҙы тыңлағандан һуң, бөтөн шик-шөбһәләр ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Сәбәбе бер - әгәр Салауат Юлаев кеүек шәхестәре булмаһа, башҡорттар ғына түгел, башҡа милләттәр ҙә тарихи-мәҙәни киңлектә үҙенә лайыҡлы урын яулай алмаҫ ине. Конференцияның төп лейтмотивы булып ошо фекер үтте һәм ул шуның менән ҡиммәтле, әһәмиәтле булды ла инде.

...МИН КИТКӘНГӘ ИЛАП ҠАЙҒЫРМАҒЫҘ,

Батыр ирҙәр тыуыр тағы ла!

Эйе, башҡорт халҡы арҙаҡлы шәхестәргә бай һәм улар үҙҙәренән һуң килгән быуынды тәрбиәләүҙә, уларҙа лидер сифаттарын булдырыуҙа, яңы шәхестәр үҫтереүҙә, милләттең үҙаңын күтәреүҙә ҙур роль уйнай. Социология фәндәре докторы Рим Вәлиәхмәтов билдәләүенсә, "башҡорттарҙың үҙаңын күтәреүҙә М. Аҡмулла, М. Биксурин, М. Бураҥголов, А. Ҡарғалы, Ғ. Кейеков, Ғ. Соҡорой, Р. Фәхретдинов, М. Өмөтбаев һ.б. кеүек шағир-мәғрифәтселәр ҙур роль уйнай. М. Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" һәм Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғырҙары бөгөн дә көнүҙәк булып тора, халыҡ күңелендә набат булып яңғырап, рухты күтәрә. Бөгөн башҡорт ихтилалдарының емеклектәр һәм бихисап ҡорбандарҙан башҡа бер нәмә лә бирмәүе хаҡында хаталы ҡараш йәшәй. Эйе, ҡорбандар күп була, әммә тап ошо ихтилалдар Рәсәйҙең милли-колониаль сәйәсәте шарттарында башҡорттарҙың этнос булараҡ һаҡланып ҡалыуының бер элементы булып тора ла инде. Күп этностар ер йөҙөнән юҡ ителгәндә, ихтилалдар башҡорттарға аҫабалығын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, мәҙәниәтен, динен һәм телен генә түгел, азатлыҡҡа, үҙаллылыҡҡа, үҙбилдәләнешкә ынтылышын һаҡлап ҡалырға ярҙам иткән". Социологик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бөгөн дә тап тарихи хәтер башҡорт милләтенең үҙаңын һаҡлаусы төп фактор булып тора. Тарих раҫлауынса, шәхестәрҙең исемен телгә алыуҙы ни тиклем генә тыйырға тырышмаһындар, халыҡ һөйөүе, ҡан хәтере йылдар үткәс тә уларҙы ҡабат күтәрә. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә, хатта сит илдәрҙә азатлыҡ символына әүерелгән Салауат Юлаев та - шундай шәхестәрҙән. Юҡҡа ғына БДУ-ның фән буйынса проректоры Вадим Захаров уҡыу йортоноң ректоры исеменән тәбриклеү сығышында милли геройҙы Спартак, Жанна д'Арк, Че Гевара менән бер рәткә ҡуйманы һәм уның башҡорт халҡының ғына түгел, Башҡортостандың күп милләтле халҡының батыры тип атаманы. Сөнки Салауат Юлаев 20 генә йәшендә үҙен оҫта ойоштороусы, артынан төрлө милләт вәкилдәрен эйәртә һәм туплай алған лидер, батша Рәсәйенең хәрби уҡыу йорттарын тамамлаған хәрби етәкселәренең армияһын тар-мар итерлек хәрби оҫталыҡҡа эйә яугир, крәҫтиәндәрҙең күңеленә үтеп инерлек өндәмәләр менән сығыш яһаусы шағир-импровизатор итеп кенә түгел, тәү сиратта, халыҡ мәнфәғәтен, илен, телен, динен яҡлаусы итеп таныта.

Конференция шулай уҡ Крәҫтиәндәр һуғышының хәҙер инде сит ил тарихсыларының тикшеренеү объектына ла әүерелеүенә бер дәлил булып торҙо. Токионан килгән ҡунаҡ, Мәйдзи университеты профессоры, тарих фәндәре докторы К. Тоёкава Пугачев ихтилалын тикшереүгә яңыса ҡарашы менән уртаҡлашты һәм: "2007 йылда Эстонияның Палдиски ҡалаһында булдым, Тарту ҡалаһында архив материалдары йыйҙым. Совет тарихсылары Салауат Юлаевтың һәм уның атаһының һуңғы көндәре тураһында мәҡәләләр яҙһа ла, мин тапҡан архив документтарын ҡулланмаған. Уларҙа шул ваҡыттағы рус хөкүмәтенең каторжандарҙы илдең төрлө ҡәлғәләрендә һәм заводтарында эшсе итеп тотоуы һүрәтләнә. Ошо материалдар нигеҙендә беҙ Пугачев етәкселегендәге ихтилалға һәм Рәсәй империяһының идара системаһына яңыса ҡарай һәм уларға анализ яһай аласаҡбыҙ", - тип белдерҙе. Был йәһәттән, сит илдәргә лә автомобилдәрҙә сәйәхәткә сығыусы һәүәҫкәр сәйәхәтсе Илдар Камалетдиновтың "АиФ" (№21, 2014 й.) гәзитенә биргән әңгәмәһендәге: "Бында эшләгән барлыҡ аҡсаһын Юлаев һәм уның арҡаҙаштары Палдискиҙа төҙөлгән православие сиркәүенә хәйер итеп биргән. Ул хәҙер Изге Георгий Победоносец ҡорамы тип атала һәм унда дини йырҙар башҡарылғандан һуң башҡорт батырына һәм уның алыҫтағы тыуған иленә гимндар башҡарыла", - тигән юлдарҙың, тимәк, ысынбарлыҡ булыуы ла ихтимал һәм Салауат Юлаев темаһы артабан да өйрәнеүҙе талап итә.

Дөйөм алғанда конференцияла барлығы 100-ҙән ашыу сығыш тыңланды. Улар нигеҙендә башҡорт халҡының арҙаҡлы улы Салауат Юлаевтың тормош юлы һәм ижады Башҡортостандың ғына түгел, тотош Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының тарихында, мәҙәниәтендә һәм әҙәбиәтендә мөһим роль уйнауы билдәләнде. Милли геройыбыҙҙың эшмәкәрлеге миҫалында шәхестең тарихи-мәҙәни киңлектәге феномены ҡаралды. "Кешелектең бөгөнгө тығыҙ бәйләнеше шарттарында шәхестең роле күп тапҡырҙарға арта, сөнки айырым кешенең эшмәкәрлеге йәки эшһеҙлеге үҫеш юлдарын билдәләүгә, бигерәк тә милләт-ара мөнәсәбәттәргә ҡағылышлы аныҡ проблемалар буйынса бер-береһенә ҡаршы тороуҙың һөҙөмтәһенә йоғонто яһай. Төп йүнәлеше булып дәүләттең милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыу торған төбәк властары һәм урындағы үҙидара органдары эшмәкәрлегендә шәхес факторына солох, тыныслыҡ һәм граждандарҙың именлеге бәйле. Ә был илдең үҫеш юлынан барыуының, уның киләүәте нығыныуының төп шарты булып тора", - тиелгән юлдарҙың резолюцияла урын алыуы ла юҡҡа түгел.

Шулай уҡ резолюция пункттары ла уйланылған һәм аныҡ булыуы менән иғтибарға лайыҡ. Унда шундай тәҡдимдәр бар: республика халыҡтары араһында дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү республика властарының төп бурысы булып тороуын иҫәпкә алып, республика етәкселегенә уларға тейешле профилдәге юғары белемле кадрҙарҙы тәғәйенләргә; Башҡортостан Республикаһының барлыҡ власть органдарының иғтибарын тел сәйәсәте өлкәһендә проблемалар артыуға һәм башҡорт теленең дәүләт теле һәм белем биреү теле булараҡ позициялары ҡыҫырыҡланыуға йүнәлтергә; БР Мәғариф министрлығына ауыл мәктәптәрен һаҡлап ҡалыу буйынса аныҡ саралар күрергә, сөнки финанс средстволарын экономиялау маҡсатында уларҙы күпләп ябыу ауыл ерендә йәшәгән балаларҙың туған телен, тарихын һәм мәҙәниәтен, шәхес булараҡ традицион милли тамырҙарын формалаштырыуҙан мәхрүм итә; БР Мәҙәниәт министрлығына, тәү сиратта, ауыл мәҙәниәт усаҡтарының һәм тарихи-мәҙәни үҙәктәрҙең матди-техник базаһын нығытыу буйынса даими һәм планлы эш алып барырға, уларҙың ҡеүәтен башҡорт халҡының һәм республикала йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың тарихи-мәҙәни мираҫын һаҡлау, үҫтереү һәм пропагандалау маҡсатында киңерәк файҙаланырға; Өфө ҡалаһы хакимиәтенә, БР Мәҙәниәт министрлығына Салауат Юлаев проспектының бер участкаһында Салауат Юлаев исемендәге тарихи-мәҙәни үҙәк асырға (ул тарихи-мәғрифәт сараларынан тыш, БР депутаттар корпусы һәм власть органдарына, уҡыусылар, йәштәр, баш ҡала ҡунаҡтарына Башҡортостандың арҙаҡлы шәхестәренең тормошо һәм эшмәкәрлеге менән мотлаҡ танышыуҙы бурыс итеп ҡуйырға тейеш); Башҡортостан Республикаһы етәкселегенән Хөкүмәттең саралар планына Башҡорт дәүләт университеты базаһында мотлаҡ республика бюджетынан финансланған традицион Салауат уҡыуҙарын үткәреүҙе индерергә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Батырҙарҙы халыҡ тыуҙыра, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Конференция эшенән күренеүенсә лә, туған теле, әҙәбиәте, мәҙәниәте, тарихы аша үҙенең батырҙарын, тарихын быуын-быуынға түкмәйсәсмәй еткергән милләттең генә быуын һайын шәхестәре, батырҙары тыуа. Шуға ла, ирекһеҙҙән, Салауаттың тауышы ҡолаҡта сыңлап киткәндәй: "Мин киткәнгә илап ҡайғырмағыҙ, батыр ирҙәр тыуыр тағы ла..."

Шәрифә САЛАУАТОВА.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

Революцияның Башҡортостанға, башҡорт халҡына йоғонтоһо, милли хәрәкәттең барлыҡҡа килеүе һәм халыҡтың үҙаңы күтәрелеүгә сәбәп булған тарихи осор менән тарих фәндәре кандидаты Нурислам Мирхәйҙәр улы ҠАЛМАНТАЕВ таныштыра.

ХАЛЫҠТЫҢ ҮҘАҢЫ КҮТӘРЕЛЕҮГӘ...

революция осоро ла сәбәпсе

Мосолман халыҡтарының уяныуы

Оҡшаш ваҡиға шул уҡ йылда Бәләбәй өйәҙенең Йәрлекәү ауылында була. Гвоздилов исемле урядник үҙенең стражнигы менән баҙар буйлап үтеп барғанында бер мосолмандан ниндәй китаптар менән һатыу иткәнен һорай. Уның дини китап менән һатыу иткәнен асыҡлағас, үҙенсә "цензура" үткәреп, китаптарҙы тартып ала, ә китап һатыусыны участкаға алып китә. Быға шаһит булған халыҡ, урядникты үлтерәйек, тип уның фатирын уратып ала һәм үҙҙәре янына сығыуын һорай. Ул тәҙрәнән сығып, бер кешегә үлемесле яра эшләп, халыҡтың ҡаушауынан файҙаланып, ҡаса. Икенсе көн сыуалышты баҫыр өсөн ауылға 36 стражник менән исправник килә.

Ошо факттарҙы Дәүләт думаһындағы мосолман депутаттары күтәреп сыға, хеҙмәткәрҙәренең ҡылыҡтарына аңлатма биреүҙәрен һорап, Эске эштәр министрлығына мөрәжәғәт итә.

1905-1907 йылдарҙағы ваҡиғалар Рәсәй мосолмандарын ғына түгел, күрше илдәр мосолмандарын да революцион хәрәкәткә килтерә. Был хәрәкәттәрҙең башында башҡорттар ҙа була. Шундай бер кеше хаҡында "Башҡорттарҙың тарихы" китабында Әхмәтзәки Вәлиди: "1905 йылда революция осоронда Тимер Ғәли улы исемле башҡорт Ҡаҙағстанда һәм Ҡытайҙың Кульджале тигән ерендә революцион союздар ойоштора, конгресс йыя һәм башҡорттар ҡаҙаҡтар менән бергә үҙҙәренең хоҡуҡтарын яҡлай аласаҡ, тип белдерә", - тип яҙа.

Мосолман хәрәкәте башҡорт интеллигенцияһын һәм урындағы дин әһелдәрен дә йәлеп итә. "Мосолмандар иттифағы"н ойоштороусылар араһында башҡорттарҙан Шәйхәйҙәр Сыртланов менән Ямалетдин Хурамшин да була. Улар шулай уҡ Дәүләт Думаһының мосолман фракцияһында торалар.

Йәҙитселек

Көнкүрештәге һәм кешеләр аңындағы патриархаль-феодаль ҡалдыҡтарҙан, артта ҡалыуҙан ҡотолоу, мәҙәниәтте һәм мәғрифәтте тергеҙеү, үҫтереү Мосолман хәрәкәтенең төп йүнәлеше булып тора. Иң алдынғы йәштәр - мөғәллимдәр, шәкерттәр мәҙрәсә-мәктәптәрҙә эшләй. Улар мәҙрәсәләрҙең уҡыу-тәрбиә эшендә төптән реформалар үткәреүҙе, дәйөм дисциплиналар һанын арттырыуҙы талап итә. Хәрәкәт Ҡаҙандың "Мөхәммәҙиә" мәҙрәсәһендә башланып китә, һуңынан Ырымбурҙың "Хөсәиниә" мәҙрәсәһенә күсә. Өфөнөң "Ғәлиә" мәҙрәсәһе йәҙитселектең иң алдынғы уҡыу йортона әйләнә.

Абдулҡадир Инан да был эштән ситтә ҡалмай. Үҙенең хәтирәләрендә: "Мин ул саҡта Силәбенең иҫке ысулдар менән уҡытҡан мәҙрәсәһендә белем ала инем. Революция үҙенең йырҙары менән минең хәтергә нык уйылды. Әхмәт исемле дуҫым менән "Марсельеза", "Интернационал" йырҙарының һүҙҙәрен табып, йырлап йөрөй башланыҡ... Ошо уҡ ваҡытта күрше йәҙитселек ысулы менән уҡытылған мәҙрәсәнең мөғәллиме миңә "Мөхәммәҙиә" мәҙрәсәһе талиптары тарафынан сығарылған "Әл-Ислах" гәзитен бирҙе. Шулай итеп, "шәкерттәр хәрә-кәте" беҙҙең мәҙрәсәгә лә килеп инде. Йәш булыуыма ҡарамаҫтан, беҙҙең мәҙрәсәлә шул эште башлаусы мин инем", - тип яҙа ул.

Йәҙитселектә ул заманның күп әҙиптәре ҡатнаша. Ырымбурҙа Ризаитдин Фәхретдин сығарған "Шура" журналы мәғрифәтселек рухында була. Шулай уҡ Өфөлә, Ырымбурҙа сығарылған башҡа баҫмалар ҙа халыҡты уянырға саҡыра. Ризаитдин Фәхретдиндең "Рәсәй мосолмандарының ихтыяждары" китабы милли мәсьәләләргә арнала. Әммә режим йәҙитселеккә ҡырҡа ҡаршы була. Йәҙитселәрҙән ҡурҡалар. Былар ғилем алып, араларында уҡымышлы кешеләре күбәйһә, уларҙың үҙаңы күтәрелһә, Рәсәй дәүләтенә насар буласаҡ, тигән ҡараш өҫтөнлөк итә хөкүмәттә. Әлбиттә, мосолмандар йөҙөндә үҙҙәренә дошман эҙләү батша власының ҙур хаталарының береһе була.

Башҡорт депутаттары

Дәүләт думаһын йыйыу башҡорттарҙа ҙур өмөттәр уята: улар властың һайланған органдары аша үҙ мәнфәғәттәрен яҡларға һәм ошоноң өсөн үҙ вәкилдәрен Думаға үткәрергә кәрәк икәнен аңлай. 1900 йылда уҡ Бөрйән һәм Ҡарағай-Ҡыпсаҡ улыстары башҡорттары Министрҙар советы рәйесенә үтенес яҙа. Үтенестә: "Йәмәғәт тәртибе буйынса беҙҙән вәкилдәр Дәүләт думаһына һайланасағына ышаныу өсөн нигеҙ әҙ булыуын иҫәпкә алып, беҙ неҙҙән үҙебеҙҙең мөхиттән биш улысҡа ике, йә булмаһа бер вәкилде һайларға рөхсәт биреүегеҙҙе һорайбыҙ. Ул беҙҙең мәсьәләләрҙе тикшергәндә булышлыҡ итер ине",- тип әйтелә.

1-се Думаға Өфө губернаһынан 6 мосолман депутат: Әхмәтов, Йәнтүрин, Мәҡсүтов, Сыртланов, Тевкелев, Хурамшин һайлана. Ырымбур губернаһынан мосолмандарҙың мәнфәғәтен Мәтинов менән Рәмиев яҡлай. 2-се Дәүләт думаһында Өфө губернаһынан 7 депутат: Биглов, Күлбәков, Сыртланов, Тевкелев, Туҡаев, Хәсәновтар була. Ырымбур губернаһынан Сәйфетдинов менән Усманов тигән депутаттар халыҡ исеменән сығыш яһай.

Дәүләт думаһына депутаттар итеп башҡорттар яҡшы улдарын һайлай. 1-се, 2-се Думала депутат булған Ш. Сыртланов Ырымбур кадет корпусын тамамлай, губернаның земство идаралығында ағза булып тора, почетлы мировой судья. 1-се Дума депутаты Ямалетдин Хурамшин Бәләбәй ҡалаһының ахуны була. Златоуст өйәҙенән 2-се саҡырылыш депутаты Шәрәфетдин Күлбәков Ырымбур кадет корпусын тамамлай, улыс судының рәйесе вазифаһын биләй, "Мосолман иттифағы"ның әүҙем ағзаһы була. Ырымбур өйәҙе Орск өйәҙенең Назар ауылында тыуған Шаһишәриф Мәтинов шулай уҡ мосолман фракцияһында әүҙем эш алып бара. Ул Ырымбур ҡалаһы халыҡ фирҡәһенең ағзаһы, ахун да була. Мәтинов Әхмәтзәки Вәлиди йәш саҡта уларҙың өйөнә ҡунаҡҡа килә, йәш егеткә милли-азатлыҡ хәрәкәте тураһында Грушевский менән Ковалевский исемле профессорҙарҙың китаптарын бүләк итә (Ә. Вәлиди был турала үҙенең "Хәтирәләр"ендә телгә ала). Ул шулай уҡ үҙ аҡсаһына мәктәп менән китапхана ла төҙөй. Ырымбур губернаһының Троицк өйәҙенән Шаһбал Сәйфетдинов Дәүләт думаһының 2-се саҡырылыш депутаты була, шулай уҡ "Мосолман иттифағы"ның һәм Думаның мосолман фракцияһында әүҙем эш алып бара.

Дәүләт думаһындағы юғары вазифаға башҡорттарҙан булған депутаттар яңылыш ҡына, кемдеңдер булышлығы менән килеп эләккән кешеләр булмай. Улар юғары дәүләт структураһында эшләүҙәренә ҡарамаҫтан, халыҡ мәнфәғәтен онотмай. Ер, дин, мәктәптәр мәсьәләһен әүҙем күтәрәләр. Дума Петербургта урынлашыуына ҡарамаҫтан, башҡорт депутаттары халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә була, Башҡортостанға килеп, кешеләр менән осрашалар, ысын мәғәнәһендә халыҡты ҡайғыртыусылар булалар.

Башҡорт милли хәрәкәтенең үҙенсәлеге

Милли хоҡуҡтарҙы, рухи, дини үҙенсәлектәрҙе яҡлауҙа башҡорт милли хәрәкәте дөйөм мосолман хәрәкәте менән оҡшаш. Шул уҡ ваҡытта ер мәсьәләһе башҡорт милли хәрәкәтен дөйөм мосолман хәрәкәтенән айырып торған төп үҙенсәлек була. Быуаттар буйы башҡорттарҙыҡы булған һәм һуңғы быуаттарҙа тартып алынған ерҙәрҙе ҡайтарыу башҡорт милли хәрәкәтенең төп талабы булып тора.

Башҡортостандағы аграр мәсьәләне хәл итеү өсөн Думаға бер-бер артлы хаттар ебәрелә. Мосолман фракцияһы был ғаризаларҙы ҡарауға, тикшереүгә ҙур иғтибар бирә. Шуға күрә лә мосолман депутаттарының сығыштарында ер мәсьәләһе йыш яңғырай. Башҡорттарҙың вәкилдәре халыҡҡа бирелгән аҫабалыҡ хоҡуғы хаҡында хәтергә төшөрөп, батша власының "ер сәйәсәтен" тәнҡиткә тоталар. Башҡорттарға ерҙәрен кире ҡайтарыуҙы гарантиялаған закондар ҡабул итеүҙе һорайҙар.

Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.

(Дауамы. Башы 22-23-сө һандарҙа).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

Сергей РУДЕНКО

БАШҠОРТТАР

Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Ҡатламлы ташҡа бай, әммә урманға ярлы ерҙәрҙә саман өйҙәр менән бер рәттән таш өйҙәр ҙә төҙөгәндәр. Дөйөм характеры һәм төҙөлөш ысулы буйынса улар саман өйҙәрҙән әллә ни айырылмаған. Стеналары дөрөҫ формалағы таштарҙан өйөлә һәм үҙ-ара балсыҡ менән нығытыла. Түбәһенә саман өйҙәрҙәге кеүек уҡ тупраҡ һалына. Таш өйҙәр һәр саҡ бәләкәй була, уларға тәҙрә һәм ишек ҡуйыла. Эстә усаҡ һәм урындыҡ эшләнә. Ер иҙән була йәки ер өҫтөнә таҡта түшәлә. Таш өйҙәр башҡа ҡоролмаларға ҡарағанда йышыраҡ ашхана, аш өйө булараҡ хеҙмәт итә.

Урманға ҡытлыҡ булған һыҙатта ситән өйҙәр һалына (һүрәт). Уны эстән дә, тыштан да, ҡайһы бер ҙә эстән генә туйын (балсыҡ) менән һылағандар. Бындай торлаҡты төҙөү бик ябай: дүрт мөйөш буйынса һайғауҙар ҡағып сығалар һәм уларҙы йәш ҡайын йәки тал менән үрәләр. Ишек һәм тәҙрә өсөн ҡаптар ултырталар. Бик йыш тәҙрә ҡыҫандары ҡаптарһыҙ ҡуйыла. Әгәр өй ике ҡатлы ситәндән үрелһә, улар араһындағы буш урын тупраҡ менән тултырыла. Ситәндәр ысҡынмаһын өсөн үҙ-ара арҡыры ағас менән нығытыла. Уларға ситәндең тыш яғынан шына ҡуйыла (һүрәт). Ситән өйҙәрҙең түбәһе лә башҡа төр йорттарҙыҡынан айырылмай тиерлек. Йәғни ситән стеналарға арҡыры һайғауҙар һалына һәм улар өҫтән ағас йәки ҡамыш менән ҡаплана, өҫтөнә тупраҡ түшәлә. Ҡайһы бер ваҡытта түбә уртанан ике бағанала ятыусы йыуан өрлөк менән тотола. Бер ҡатлы ситән өйҙәрҙә түбә таҡтанан һалына. Уны ергә ҡағылған дүрт йәки алты бағана күтәреп тора. Бик йыш тигеҙ итеп түшәлеп, һайғау менән баҫтырылған һалам түбәләр ҙә осрай. Ҡайһы бер урындарҙа бындай өйҙәр эстән балсыҡ менән һыланғандан һуң аҡбур йәки һары балсыҡ менән ағартыла. Эсе бығаса яҙылған башҡа торлаҡтыҡынан бер нәмәһе менән дә айырылмай (һүрәт).



Һәр башҡорт ауылының ярлы өлөшө йәшәгән торлаҡ йәйләүҙәрҙә эшләнгән бурама өйҙәргә оҡшаш. Улар шулай уҡ әрселмәгән бүрәнәләрҙән һалына һәм арлы-бирле мүкләнә. Нигеҙ булмағанлыҡтан, тәпәш стеналар шунда уҡ ерҙән күтәрелә. Тәрҙә һәм ишек өсөн уйым ҡалдырыла. Ишектәр ҡапҡа ла ултыртыла, уларһыҙ ҙа ҡуйыла. Тәҙрә рамдары иһә ҡапһыҙ урынлаштырыла. Иҙән таҡталары ергә түшәлә, түбә һалына. Мәйөшкә усаҡ йәки мейес сығарыла. Ҡыйыҡтың булыуы мотлаҡ түгел.

Шулай итеп, даими йәшәгән һәм ваҡытлыса йәшәү торлағының айырмаһы булып бураны мүкләү, тәҙрә уйыу, ишек һәм түбә һалыуҙың камиллаштырылыуы тора (һүрәт).

✓ Ошонан сығып, гәзит уҡыусыларға, кеше өсөн кредит түләү яуаплылығын үҙ өҫтөгөҙгә алмағыҙ, тип әйтке килә. Улар һеҙҙең туғанығыҙ, дуҫығыҙ булһа ла, уйлағыҙ: бәлки, кредит алыусының түләргә иҫәбе лә, мөмкинлеге лә юҡтыр.

ДОНЪЯБЫҘ

донъя ҡәҙерен

Башҡортостан Республикаһының Милли банкы кредит алыусылар һанының да, кредитын түләй алмаусыларҙың да былтырғы менән сағыштырғанда артыуын белдергән. Был турала күптән түгел "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы хәбәр итте. 1 апрелгә ҡарата республикала түләү ваҡыты үткән бурыстарҙың дәүмәле йыл башынан 2,7 процентҡа артып, 11,8 миллиард һум тәшкил иткән. Йылдың тәүге дүрт айында банктар халыҡҡа былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 14,7 процентҡа күберәк кредит биргән. Ипотека кредиттары биреү 29,2 процентҡа артҡан. Һәр кемгә билдәле: кеше кредитты аҡсаға бик ныҡ мохтаж саҡта ала. Ала ла, проценттары менән бергә кире ҡайтара. Кире ҡайтармаһа, ни була? Беҙҙең бөгөнгө ҡунағыбыҙ, Башҡортостан Республикаһы Суд приставтары хеҙмәте начальнигы Зариф Закир улы БАЙҒУСҠАРОВ менән әңгәмәбеҙҙә ошо һәм башҡа һорауҙарға яуаптар алдыҡ. Бер ыңғайҙан уның үҙенә, ғаиләһенә, ҡыҙыҡһыныуҙарына, эш итеү үҙенсәлектәренә ҡағылышлы һорауҙарыбыҙҙы ла бирҙек һәм төплө, йөкмәткеле, ҡыҙыҡлы яуаптар ишеттек.

Чечен Республикаһында алимент түләмәй ҡасып йөрөгән бер кеше лә юҡ икән. Был турала беҙгә килгәнендә Чечен Республикаһы Суд приставтары хеҙмәте начальнигы һөйләгәйне. "Һеҙ быға нисек өлгәшәһегеҙ һуң?" тип һорауыма, ҡунағыбыҙ: "Беҙҙә, балаңды ҡарарға тейешһең, тип, бала саҡтан тылҡыйҙар. Кемдер үҙ балаларын ҡарауҙан баш тартһа, беҙҙә ул кеше менән бер кем дә һаулыҡ та һорашмаясаҡ", - тип яуапланы. Мәскәүҙәге бер танышым менән дә ошо мәсьәлә тураһында һөйләшеп киттек тә, ул: "Башҡортостанда мосолман динле халыҡтар күп йәшәй, ә ни өсөн алименттан ҡасыусылар күп, был бит һеҙҙең диндә оло гонаһ һанала?" - тип һораны. "Беҙҙең халыҡ үҙенең дини тәрбиә традицияларынан айырылған, мосолманлыҡтарын әле яңы иҫтәренә төшөрә башланылар", - тип яуап бирҙем.

Кредит алыу хәҙер бер яман ғәҙәткә әүерелде шикелле. Ҡайһы кешеләр 5-әр кредит алыуға тиклем барып етә. Банктар ҙа, әмәлгә ҡалғандай, клиент бар икән - яҡшы, тигән һымаҡ, был күренешкә күҙ йомоуҙы ҡулайыраҡ күрә. Шуға ла кредитын ваҡытында түләй алмаусылар күбәйә. Башҡортостанда кредитомания күренеше бармы?

- Әлбиттә, бар. Беҙҙең хеҙмәт менән юлдары киҫешкән граждандар араһында төрлө сәбәптәр арҡаһында банктарға бурысын ҡайтара алмағандар күп. Кемдер эшенән бушатыла, кемдер сирләп китеп, эшен алып бара алмай, кемдер башҡа сәбәп менән аҡса табыу сығанағын юғалта. Әммә аҡсаһы була тороп та, банктарға бурысын ҡайтарырға теләмәүселәр ҙә етерлек. Һөҙөмтәлә, уғрылар үҙенә миллионлаған һумлыҡ кредит яҙҙыра ла, суд приставтарынан ҡасып йөрөй башлай. Ләкин беҙ уларҙы барыбер тотабыҙ.

Идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре һәм банк директорҙары менән йыш ҡына бергәләп кәңәшмәләр үткәрәбеҙ. Быйыл март айында үткән йыйылышта уларҙы ошо кредиттар мәсьәләһенә иғтибарлыраҡ булырға саҡырҙыҡ. "Һеҙ бер-берегеҙ менән аралашып эшләргә тейешһегеҙ. Кеше килә икән - тикшерегеҙ, бәлки, уның икенсе банкта ҡапланмаған кредиты барҙыр", - тинек. Кредитын түләй алмаусылар күбәйеүендә банк хеҙмәткәрҙәренең дә ғәйебе булыуын танымай булмай. Банктар ниндәй генә ылыҡтырғыс реклама эшләмәй бит: "30 минут эсендә генә кредит алығыҙ", тип тә саҡырыу ташлайҙар, клиенттарҙы йәлеп итеүҙең башҡа юлдарын да табалар. Аҡсаға мохтажлыҡ кисергән кеше ошондай саҡырыуҙарҙы күрә лә, банктан кредит алырға йүгерә. Уға бөгөнгөһө ҡәҙерлерәк - иртәгә кредит өсөн ҙур ғына сумма түләргә кәрәк буласағы тураһында артыҡ бошонмай ҙа. Ул ғына ла түгел, кредит алыр өсөн күптәр икенсе кешеләрҙе лә (поручитель) йәлеп итә һәм кредит өсөн яуаплылыҡты улар елкәһенә лә һала.

Ысынлап та, яҡшы танышың, дуҫ тип йөрөгән кешең, туғаның бер көндө: "Кредит алайым тигәйнем, яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыусы берәй кеше алып килмәйенсә, бирмәйҙәр икән. Ярҙам итәһеңме, ҡултамға ғына ҡуяһыңмы?" - тип, һинән ярҙам һорағанда, ни эшләргә?

- Күптәр бындай "йомош"то йомошлауҙан баш тарта, әммә ҡайһы берәүҙәр "юҡ" тип әйтергә ҡыйынһынып, ризалыҡ бирә. Һуңынан кредит алған кеше банктарҙан, суд приставтарынан ҡасып йөрөй башлаһа, яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырға ризалашҡан иптәш суд ҡарары буйынса теге сумманы ҡайтарырға тейеш булып сыға. Илауыллап, беҙҙең ишектәрҙе шаҡыуҙар, үҙҙәренең ғәйепһеҙ булыуын иҫбат итергә тырышыуҙар тап ошо саҡта башлана ла инде. Беҙ уларҙан: "Ниңә ҡултамға ҡуйҙығыҙ һуң?" - тип һорағанаҡ, ғәҙәттә, "Уйламағанбыҙ бит", тип яуап бирәләр. Ошонан сығып, гәзит уҡыусыларға, кеше өсөн кредит түләү яуаплылығын үҙ өҫтөгөҙгә алмағыҙ, тип әйтке килә. Улар һеҙҙең туғанығыҙ, дуҫығыҙ булһа ла, уйлағыҙ: бәлки, кредит алыусының түләргә иҫәбе лә, мөмкинлеге лә юҡтыр. Һуңынан дошманға әйләнгәнсе, яҡшы саҡта шикле килешеүҙән баш тартыу хәйерлерәк. Әгәр ул яҡын кешегеҙгә ысын күңелдән ярҙам итергә теләйһегеҙ икән, үтескә аҡса биреген. Мин, мәҫәлән, бер тапҡыр ҙа кем өсөндөр кредит яуаплылығы йөкләмәһен үҙ иңемә алғаным булманы. Ярҙам һорайҙар икән, хәлемдән килгәнсә, былай ярҙам итәм.

Хәҙер мәғлүмәтһеҙлек арҡаһында төрлө төп башына ултыртыуҙар ҙа йыш осрай. Айырым шәхестәр, ойошма-предприятиелар тураһындағы ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе һеҙҙең хеҙмәт аша ла аныҡлап була бит, шулаймы?

- Элегерәк республика предприятиелары эше менән ҡыҙыҡһынып, компаниялар беҙҙең хеҙмәткә йыш мөрәжәғәт итә торғайны. Улар үҙҙәренең буласаҡ партнерҙарының бурыстары булмауына инанырға теләй, ә беҙ уларға кәрәкле мәғлүмәттәр бирә инек. Хәҙер был мәғлүмәтте алыу бөтөнләй еңелләште: беҙҙең сайттағы "банк данных исполнительных производств" тип аталған төймәгә баҫаһың да, үҙеңде ҡыҙыҡһындырған ойошманың исемен яҙып, уны "тикшерәһең". Бер бурысы ла булмаған ойошмалар был исемлектә күрһәтелмәй. Ошондай уҡ "тикшереү"ҙе физик шәхестәргә лә үткәреп була. "Физик шәхестәрҙе эҙләү" тигән төймәгә баҫаһың, йәки, r02.fssprus.ru/iss/ip/ адресына инәһең дә, һине ҡыҙыҡһындырған кешенең бурысы бармы, юҡмы икәнен ҡарайһың. Әгәр суд ҡарары буйынса ул кеше ҡасандыр бурысын ҡайтармаған булһа, уның тураһындағы мәғлүмәт ошо базала һаҡлана. Был хеҙмәт "Поручитель бул әле", тип мөрәжәғәт иткән кешенең кемлеген асыҡлау кәрәк булғанда айырыуса файҙалы, минеңсә. Улай ғына ла түгел, өйләнешергә йыйыныусы йәштәр ҙә бер-береһен ошо юл менән тикшерә ала. Бәлки, өйләнешергә тәҡдим иткән кеше һеҙҙең мөлкәтегеҙгә генә хужа булырға теләйҙер? Мин осрашыуҙарҙа гел генә бер ваҡиғаны телгә алам. Бер ҡыҙ менән бер егет дуҫлашып йөрөгән. Туй көнөн дә билдәләгәндәр, ЗАГС-ҡа ғариза ла биргәндәр. Егет, Ҡаҙағстандан ата-әсәмде алып киләм, тип, ҡайтып киткән. Ә Рәсәй сигендә уны тотҡарлағандар. Ни өсөн, тиһегеҙме? Егет бер тапҡыр өйләнеп, ике балаһын, ҡатынын ҡалдырып, алимент түләүҙән ҡасып йөрөгән һәм шуға беҙҙең хеҙмәттең әлеге "ҡара исемлегендә" торған булған. Ә бурыстары булған кешене сит илгә сығармауҙы күҙ уңында тотҡан яңы закон буйынса, сик буйында хеҙмәт иткән беҙҙең суд приставтарына ундай кешеләрҙе тотоу, туҡтатыу хоҡуғы бирелгән. Шулай итеп, егет ҡыҙҙы алдарға уйлаһа ла, килеп сыҡмаған.

Алимент тураһында һүҙ сыҡҡас, республикалағы ошо хәл тураһында ла әйтеп үтәйек әле. Бөгөн балаларына матди ярҙам күрһәтергә лә теләмәгән "кәкүк"тәр һаны арта түгелме?

- Ысынлап та, был юҫыҡта республикала хәлдәр бик үк шәптән түгел. 1 майға алынған мәғлүмәттәр буйынса, республикала 28062 кеше балаһына алимент түләүҙән баш тарта. Улар араһынан 2900 кешегә сит илгә сығыуға бер йылға тыйыу һалынды, 963 кешегә енәйәт эше ҡуҙғатылды. Алимент буйынса бурыслыларға ҡарата суд приставтарының эш алымы шулай: беҙ беренсе тапҡырҙа уны киҫәтәбеҙ, икенсегә - штраф һалабыҙ, был да ярҙам итмәһә, эҙләп табып, һөйләшәбеҙ. Әгәр был саралар ҙа һөҙөмтә бирмәһә, енәйәт эше ҡуҙғатабыҙ. Енәйәт эше асылһа, хоҡуҡ боҙоусыны бер йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү ҡаралған. Тик был яза ла күптәрҙе аҡылына килтермәй: ундайҙар иреккә сыҡҡас та шул уҡ ҡылығын дауам итә. Бөгөн республика буйынса 1780 алимент буйынса бурыслыны эҙләп таба алмайбыҙ. Кемдер Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында эшләй, хатта асарбаҡ булып китеүселәр ҙә бар.

Алимент түләүҙән ҡасыусылар ниңә күбәйә? Минеңсә, бының тамырын тәрәндән - тәрбиәнән эҙләргә кәрәктер. Балалар баҡсаларында, мәктәптә генә тәрбиәләп булмай баланы. Баланы иң тәүҙә ата-әсә үҙе тәрбиәләргә тейеш. Ә ғаиләһендә йүнле тәрбиә күрмәгән бала аҙаҡ үҙ балаһына ниндәй тәрбиә бирә алһын! Чечен Республикаһында алимент түләмәй ҡасып йөрөгән бер кеше лә юҡ икән. Был турала беҙгә килгәнендә Чечен Республикаһы Суд приставтары хеҙмәте начальнигы һөйләгәйне. "Һеҙ быға нисек өлгәшәһегеҙ һуң?" тип һорауыма, ҡунағыбыҙ: "Беҙҙә, балаңды ҡарарға тейешһең, тип, бала саҡтан тылҡыйҙар. Кемдер үҙ балаларын ҡарауҙан баш тартһа, беҙҙә ул кеше менән бер кем дә һаулыҡ та һорашмаясаҡ", - тип яуапланы. Мәскәүҙәге бер танышым менән дә ошо мәсьәлә тураһында һөйләшеп киттек тә, ул: "Башҡортостанда мосолман динле халыҡтар күп йәшәй, ә ни өсөн алименттан ҡасыусылар күп, был бит һеҙҙең диндә оло гонаһ һанала?" - тип һораны. "Беҙҙең халыҡ үҙенең дини тәрбиә традицияларынан айырылған, мосолманлыҡтарын әле яңы иҫтәренә төшөрә башланылар", - тип яуап бирҙем.

Миңә йыш ҡына алимент түләмәүсе ир-егеттәрҙең ата-әсәһе, туғандары менән дә аралашырға тура килә. Ҡағиҙә булараҡ, ата-әсә мотлаҡ был

✓ ***Быйылғы дүрт ай эсендә генә бюджетҡа 2 миллиард 300 миллион һум аҡса ҡайтарып бирҙек. Эш хаҡы түләмәһәләр ҙә, беҙгә мөрәжәғәт итәләр. Быйыл 4600 кешегә 80 миллион һумдан артыҡ эш хаҡы түләттерҙек.***

ТОТҠАНЫ...

белгән ирҙәрҙә

мәсьәләлә килендәрҙе ғәйепләй башлай, киленем насар булыуы арҡаһында, улым алимент түләмәй, имеш. Ошондай һүҙ башлаусы ағай-апайҙарға: "Улығыҙҙы тәрбиәләһәгеҙсе!" - тип кәңәш бирәм. Баланды мәктәп йә йәмғиәт түгел, иң тәүҙә ата-әсә үҙе тәрбиәләргә тейеш икәнен күптәр аңламай бит. Хәҙер тәрбиә менән дә беҙгә шөғөлләнергә тура килә. Балаларына алимент түләмәй ҡасып йөрөгән ир-егетте ҡайһы саҡта мәсеткә йәки сиркәүгә алып барабыҙ. Ундағы һөйләшеүҙәрҙән һуң күптәр ғаиләләренә кире ҡайта. Яңыраҡ бер ҡатынды мәсеткә алып барғайныҡ, ул беҙгә: "Баламды балалар йортонан барып алам, эсеүемде ташлайым", - тип һүҙ бирҙе. Закон буйынса беҙ бындай эш менән шөғөлләнергә тейеш түгелбеҙ, әлбиттә, ләкин тура килә. Йәштәр менән һөйләшеү, улар араһында аңлатыу эштәре алып барыу етмәй бөгөн. Шул уҡ ЗАГС-тарҙы алайыҡ. Өйләнешергә ҡарар иткән йәштәр унда килеп, ғариза ҡалдыра ла, күпмелер ваҡыттан һуң никахтарын теркәй. Ана шул тәүге килгән көндө ЗАГС хеҙмәткәрҙәре уларға ғаилә ҡороуҙың үтә етди аҙым булыуын аңлатһын ине. Юғиһә, ғаилә тарҡала, һөҙөмтәлә, бер ниндәй ғәйепһеҙ сабый зыян күрә. Тағы бер күренеш. Ғаиләлә ыҙғыш сыға икән, ҡатын йүгереп, хоҡуҡ һаҡлау органдарына бара һәм: "Ирем эшләмәй", - тип зарлана башлай. Ә улар: "Судҡа бар, ирең алимент түләһен", - ти ҙә сығара. Әгәр хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәре шул мәлдә ир һәм ҡатын менән матур итеп бер һөйләшһә, эш судҡа тиклем барып та етмәҫ ине.

▸ Донъяны мигранттар баҫты, тип ризаһыҙлыҡ белдереүселәр күбәйҙе. Ризаһыҙлыҡ белдерергә сәбәптәре лә бар кеүек. Һеҙҙең хеҙмәт мигранттар мәсьәләһе менән дә шөғөлләнә икәнен күҙҙә тотоп, "Мигранттарһыҙ йәшәп булмаймы ул?" тигән һорау бирге килә.

- Мигранттар кәрәклеккә кәрәктер инде, ләкин улар беҙҙең илдә закон буйынса ғына эшләргә тейеш. Әммә беҙҙә бер ниндәй дәүләт пошлинаһы ла түләмәгән, ҡасып-боҫоп эшләп йөрөгән законһыҙ мигранттар байтаҡ. Ундайҙарҙы асыҡлап, беҙ уларҙы үҙҙәренең илдәренә ҡайтарып ебәрәбеҙ. Былтыр 240 кешене илдән сығарғайныҡ, быйыл дүрт ай эсендә генә 220-нән артыҡ кешене самолетҡа ултыртып, ҡайтарып ебәрҙек. Быйыл законһыҙ мигранттар һаны былтырғынан ике тапҡырға күберәк булмаҡсы. Уларҙың юл сығымдарын ҡаплау, документтарын теүәлләү беҙҙең яуаплылыҡта. Ғәҙәттә, законһыҙ мигранттарҙың үҙҙәре менән бер документы ла булмай. Һөҙөмтәлә, документтарҙы берәмләп, төрлө ил вәкиллектәре аша үҙебеҙгә йыйырға тура килә. Ғәҙәттә, үҙ илендә берәй енәйәт ҡылған әҙәмдәр кире ҡайтырға ашыҡмай. Самолетҡа ултыртыр алдынан бер мигранттың ҡулына паспортын тотторғайныҡ, ул документты ауыҙына ҡабып, сәйнәй башланы. Ярай әле, туҡтатып ҡалдылар. Закон буйынса, шәхес таныҡлығы булмаған кешене самолетҡа ултыртмайҙар бит.

Законһыҙ мигранттарҙың юл сығымдары дәүләт ҡаҙнаһы ярҙамында ҡаплана, тип әйткәйнем инде. Әле Рәсәйгә килгән һәр сит ил гражданы 20 мең тирәһе иғәнә түләргә тейеш, тигән закон проекты әҙерләнә. Был проект ҡабул ителһә, законды боҙоусы сит ил гражданын үҙҙәре түләгән аҡса иҫәбенә кире ҡайтара башлаясаҡбыҙ. Был закон бик дөрөҫ һәм урынлы булыр ине.

Бөгөн күпселек енәйәттәрҙе ситтән килеүсе мигранттар эшләй, тигән ҡараш бар. Бик үк дөрөҫлөккә тап килмәйҙер был. Үзбәкстан, Тажикстан, Грузия, Әрмәнстан республикаларынан килеүсе эшселәрҙе, киреһенсә, эшлекле булыуҙары өсөн маҡтарға була. Халыҡта: "Беҙҙекеләр эш эшләһә, уларҙы ашатып-эсерергә, тәмәке бирергә кәрәк, ә мигранттарға айырым йәшәр урын да, ризыҡ йүнләргә лә кәрәкмәй - эшләгән урындарында йәшәйҙәр, үҙҙәренең тамағын үҙҙәре туйҙыралар, эсмәйҙәр, тәмәке тартмайҙар", - тигән фекер йөрөй. Кемдер ошо кешеләр килгәнгә күрә, урындағы халыҡҡа эш ҡалманы, тип тә һанай. Мин был фекер менән дә төптө килешмәйем. Эш һәр ваҡыт бар ул. Эшләгеһе килмәгәнгә генә эш булмай. Эшһеҙ ултырыу - ялҡауҙар шөғөлө, тип һанайым.

▸ Зариф Закир улы, тормошобоҙҙа йылдан-йыл кредитомания, наркомания, ришүәтселек, ғаиләләр тарҡалыуы һымаҡ кире күренештәр арта бара. Бындай күренештәр менән һеҙҙең хеҙмәт кешеләренә йыш осрашырға тура килә. Ошо алама күренештәрҙән берәй мәл арына аласаҡбыҙ, тип әйтеп буламы? Әллә кешелек улар менән мәңге көрәшеп йәшәргә мәжбүр буласаҡмы? Оптимизмға урын бармы?

- Оптимизмға һәр саҡ урын бар, әлбиттә. Кешелек һәр саҡ кире күренештәргә ҡаршы көрәшеп, еңеп йәшәгән. Көрәшеүҙең файҙаһы юҡ, тип ултырыу дөрөҫ түгел. Әлбиттә, әле һеҙ һанап үткән кире күренештәрҙе тамырынан ҡоротҡан илдәр донъяла юҡ. Һәр дәүләттә был күренештәр ниндәйҙер кимәлдә бар. Миңә эшем буйынса төрлө илдәрҙә булырға тура килә. Германияла, мәҫәлән, закондар беҙҙәгегә ҡарағанда күпкә ҡатыраҡ. Мәҫәлән, алимент түләүсе кеше суд приставын алдаһа, уны 6 айға бер ниндәй судһыҙ-ниһеҙ төрмәгә яба алалар. Ә беҙҙә ундай яза юҡ. Ни өсөн алға киткән сит илдәрҙә хоҡуҡ боҙоуҙар аҙыраҡ? Сөнки ул илдәрҙә кешеләр законды хөрмәт итә. Мәктәптә лә "закон боҙорға ярамай" тип өйрәтәләр. Ә законды хөрмәт итеү - ғаиләләге тәрбиәнән киләһе. Беҙҙә, Рәсәйҙә, балаҡ менән етәкләшеп, юлды светофорҙың ҡыҙыл утына үтеү ҙә ғәҙәти һанала. Ундай кешенең балаһы: "Юл ҡағиҙәһен боҙһаң да ярай икән", - тигәнде, шунан ата-әсәһенең башҡа закон боҙоуҙарын башына һеңдереп үҫә, үҙ ҡылығына күсерә...

▸ Һеҙҙең суд приставтары хеҙмәтенә шул тиклем күп бурыстар йөкмәткәндәр, ул бурыстарҙы атҡарыуҙың һөҙөмтәһе лә күҙ алдында…

- Эйе, бурыстарыбыҙ ҙа, эшебеҙҙең һөҙөмтәһе лә ҙур. Әле бына быйылғы дүрт ай эсендә генә бюджетҡа 2 миллиард 300 миллион һум аҡса ҡайтарып бирҙек. Төрлө учреждениелар хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы түләмәһәләр ҙә, беҙгә мөрәжәғәт итәләр. Быйыл 4600 кешегә 80 миллион һумдан артыҡ эш хаҡы түләттерҙек. Хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы түләмәгән ойошмалар менән беҙ нисек көрәшәбеҙ? Яп-ябай: ойошманың милкен тартып алып, уны һаттырып, аҡсаһын эшселәренә таратып бирәбеҙ.

Эшебеҙ бик үк еңелдән түгел, дөрөҫ аңлайһығыҙ. Шуға ла күптәр, айырыуса йәштәр, беҙҙең системала оҙаҡ эшләй алмай. Шуға, форсаттан файҙаланып, иҡтисад һәм юридик факультеттарҙы тамамлаусы йәштәрҙе үҙебеҙгә эшкә саҡырғы килә.

▸ Зариф Закир улы, Һеҙҙең дә бала сағығыҙ, бала саҡ хыялдарығыҙ булғандыр?

- Мин Күгәрсен районы Ҡалмаҡ ауылында тыуғанмын. Атайым - көтөүсе, әсәйем һауынсы булдылар. Ғаиләлә биш бала үҫтек, мин - уртансылары. 1812 йылғы Ватан һуғышында йөҙ башы булған ҡартатайымдың ҡартатаһы - Хөснитдин батыр тоҡомонанмын. Беҙҙең ғаиләлә хәрбиҙәр күп: ике ағайым да хәрби һөнәргә эйә булды: офицерҙар булдылар, Башҡортостандан ситтә йәшәнеләр. Хәҙер улар хаҡлы ялда. Уларҙан күреп, мин дә тәүҙә хәрби булырға хыялланғайным. Әрмелә хеҙмәт иткән саҡта осоусылар училищеһына ла ингәйнем. Һаулығым да осоусы булырға мөмкинлек бирә ине лә, ниңәлер, кире уйланым - юрист һөнәрен үҙләштерергә ҡарар иттем. Хәҙер ҡустым менән һеңлем хәрби училищела уҡыйҙар. Тимәк, хәрбиҙәр традицияһы дауам итә, тигән һүҙ.

Әрменән ҡайттым да, атайым урынына көтөү көтөп йөрөнөм. Атайым: "Шунан, улым, кем булырға уйлайһың? Беҙҙең колхозда бер көтөүсе урыны бушаны, ҡалаһыңмы әллә?" - тип һораны. Мин: "Эшкә Өфөгә барырмын тигәйнем, атай", - тип, уҡырға барырға теләүемде әйтмәй торҙом. Атайым: "Ярар, үҙең ҡара", - тип, фатихаһын бирҙе. Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетының юридик факультетына уҡырға индем. Ауылға ҡайтып, был яңылығым менән уртаҡлашҡайным, өйҙәгеләр минең хәбәремә әллә ни әһәмиәт тә бирмәне. Ул мәлдә туғандар "юрист" тигән һөнәр тураһында белмәйҙәр ҙә ине. Шулай итеп, 1988 йылда юридик факультет студенты ла булдым, бер ыңғай суд башҡарыусыһы булып эшкә лә урынлаштым. Был эштә һигеҙ йыл хеҙмәт иттем, артабан Калинин районы судына судья итеп тәғәйенләнеләр. Биш йыл ошо вазифаны атҡарғандан һуң әлеге эшемә күсергә тәҡдим иттеләр. Ризалашырға тура килде. Беҙ 1997 йылдан Юстиция министрлығы янында эшләһәк, 2005 йылда суд приставтарының айырым хеҙмәте ойошторолдо. Бөгөн һәр районда беҙҙең бүлектәр бар. Республика буйынса идаралыҡта ике меңләп кеше эшләй.

▸ Беҙҙең халыҡта атай тәрбиәһе һәр ир бала өсөн оло абруй, оло мәртәбә һанала. Ә Һеҙ атайығыҙҙан ниндәйерәк һабаҡтар алдығыҙ?

- Колхоз ерҙәре ауылдан 40 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡас, йәй буйы шунда ҡуна ятып көтөү көтәбеҙ ҙә, көҙ етһә, ауылға ҡайта инек. Атайым мине ете йәшемдә атҡа мендерҙе. Шуға ла һабантуйҙарҙағы ат бәйгеләрендә алдынғылыҡты бирмәнем - гел беренсе урын яулай торғайным... Көтөү көткән саҡта төрлө хәлдәргә осрайһың. Шундай мәлдәрҙә атай һәр ваҡыт мине тынысландыра, миңә ҡыйыулыҡ өҫтәй торғайны. Шулай, бер саҡ төнөн ҡыуышта ятһаҡ, айыу яҡынлағаны ишетелде. Минең ҡурҡҡанды шәйләп, атайым: "Ҡурҡма, ике аяҡлы кешенән айыу үҙе ҡурҡа ул", - тине. Атайҙың был һүҙҙәренән һуң айыуҙың айыуын ҡурҡыта алыуыма ғәжәпләнгәнем хәтеремдә.

Атайым мине бөтөн нәмәгә лә өйрәтте. Эшләгәнең кеше өсөн булһа, өйрәнгәнең - үҙең өсөн, улым, ти торғайны. Ҡыш көндәре колхозда эш булмай бит инде, шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең атай ауыл кешеләренә өҫтәл - ултырғыстар, бура, сана эшләй. Мин уға бар эштәрҙә лә ярҙамлашып йөрөйөм. Атайҙан өйрәнгән һөнәрҙәр әле лә хәтерҙә, нимәгә генә тотонһам да, килтереп сығарам. Бура ла бураҡаным бар...

Атай менән булған бер ҡыҙыҡ хәл тураһында ла телгә алғы килә. Был хәлдә атайҙың ҡурҡыу белмәҫ тәбиғәте сағыла. Совет осоронда беҙҙең колхоз рәйесе халыҡты йыйып, бер депутат өсөн тауыш бирергә өндәргә тотонған. Шул саҡ атайым баҫҡан да: "Һеҙ ул кешене килтерегеҙ, күрһәтегеҙ, беҙ уға үҙебеҙҙе борсоған һорауҙарҙы бирәйек. Бәлки, ул бөтөнләй негрҙыр", - тип әйтеп һалған. Ул бер ниҙән дә ҡурҡмай торғайны. Ҡурҡыу белмәүе ҡартатайымдан киләлер, моғайын. Ул биш ауылға мулла булған, тиҙәр. Һөйләүҙәре буйынса, эскән, тәмәке тартҡан кешеләр ҡартатайҙы күреү менән ҡасыу яғын ҡараған.

Атайым мине бөтөн нәмәгә лә өйрәтте. Эшләгәнең кеше өсөн булһа, өйрәнгәнең - үҙең өсөн, улым, ти торғайны. Ҡыш көндәре колхозда эш булмай бит инде, шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең атай ауыл кешеләренә өҫтәл - ултырғыстар, бура, сана эшләй. Мин уға бар эштәрҙә лә ярҙамлашып йөрөйөм. Атайҙан өйрәнгән һөнәрҙәр әле лә хәтерҙә, нимәгә генә тотонһам да, килтереп сығарам. Бура ла бураҡаным бар... Атай менән булған бер ҡыҙыҡ хәл тураһында ла телгә алғы килә. Был хәлдә атайҙың ҡурҡыу белмәҫ тәбиғәте сағыла. Совет осоронда беҙҙең колхоз рәйесе халыҡты йыйып, бер депутат өсөн тауыш бирергә өндәргә тотонған. Шул саҡ атайым баҫҡан да: "Һеҙ ул кешене килтерегеҙ, күрһәтегеҙ, беҙ уға үҙебеҙҙе борсоған һорауҙарҙы бирәйек. Бәлки, ул бөтөнләй негрҙыр", - тип әйтеп һалған. Ул бер ниҙән дә ҡурҡмай торғайны. Ҡурҡыу белмәүе ҡартатайымдан киләлер, моғайын. Ул биш ауылға мулла булған, тиҙәр. Һөйләүҙәре буйынса, эскән, тәмәке тартҡан кешеләр ҡартатайҙы күреү менән ҡасыу яғын ҡараған.

(Дауамы 11-се биттә).

✓ *Ләйсәндең бөтөн һорауға ла тулы, матур, образлы яуап биреүе һоҡландырҙы. Әңгәмәбеҙ тәү сиратта "Несломленная" китабы тирәләй барҙы. Көндәлектәренә нигеҙләнеп, әсәһенең ижад емеше был.*

СӘХИФӘНАМӘ

СИТ ТАРАФТАРҒА...

бәхет һәм хыял артынан

Хыял көсө

Вәсил ағайҙың һүҙен тотоп, Мәскәүҙәге һәр секундымды мәғәнәле үткәрергә тырышам. Музей-күргәҙмәләр, тапшырыуыма видеоматериал йыйыу, файҙалы һәм файҙаһыҙ осрашыуҙар - барыһы ла алдан билдәләнгән. Ғөмүмән, минең өсөн "файҙаһыҙ осрашыу" тигән төшөнсә юҡ. Бер нәмә лә осраҡлы түгел, һәр нәмәнең йәшерен мәғәнәһен күрә белергә кәрәк, тигән теория яҡлымын.

Тапшырыуымдың тағы бер геройы - Альбина Ғәйрүзова ла тап шундай фекерҙә. Өс йәшлек сағында телевизорҙан Галина Вишневскаяны күреп ҡалып, уға ҡушылып йырлағанын бөгөнгөләй хәтерләй ул. Бушҡа булмай был. Район үҙәгендәге музыка мәктәбенә уҡытыусы итеп ебәрелергә тейеш Альбина, автоһәләкәттән һуң бөртөклəп тиерлек йыйылған, ҡаҙаҡ менән нығытылған "ауыҙын күтәреп", Галина Вишневскаяның Опера йыры үҙәгенә ҡабул итеү имтихандарына юллана. Алиһә башҡорт ҡыҙын үҙе тыңлап, уҡырға ала...

Галина Вишневская менән осрашыу хаҡында ишетеү менән операторымдың йөҙө ағарынып киткәс, тәүҙә аңламаным. Опера үҙәгендә ла шундайыраҡ йөҙҙәр ҡаршы алды: халыҡтың аяҡ осона баҫып йөрөүен фортепиано бүлмәләрендә йыр күнекмәләре яһаған студенттарға ҡамасауламаҫ өсөн булдырылған ҡағиҙә, тип ҡабул иттем. Баҡһаң, беҙ тапшырыу төшөргән көн Галина Павловнаның имтихан ала торған ваҡытына тап килгән икән. Ваҡыты-ваҡыты менән, бер кемгә лә алдан әйтеп тормайынса, уҡыусыларының ария башҡарғанын тыңларға килә ул шулай. Уҡыу йортоноң өҫкө ҡатынан лифт менән генә тура Үҙәккә төшә лә, барыһын да борҡотоп, яңынан үҙ донъяһына ҡайтып бикләнә торған ғәҙәте бар икән.

Ул көндө беҙ уңдыҡ: бәхеткә күрә, опера примадоннаһының кәйефе күтәренке ине. Бойомға ашмаҫ кеүек сценарийым кадрҙарын камера мониторынан күреү бәхетенә ирештем: Альбина менән бөйөк ҡатын Галинаның әңгәмәһе уңышлы килеп сыҡты, минеңсә. Галина Павловна тапшырыуымдың героиняһына фатихаһын бирҙе, хәтирәләр йыйынтығына автографын да ҡуйҙы.

Осраҡлыҡ буйынса, Вишневскаяның иҫән саҡтағы һуңғы кадрҙарының береһе тап миндә булып сыға. Хәтернамәләрен уҡып, был бөйөк кешенең ихтыярына, тормошҡа, сәнғәткә булған мөхәббәт көсөнә таң ҡалған инем. Уның үҙен күреү, һынсыл һәм шул уҡ ваҡытта мөләйем ҡарашын тойоу - үҙе бер бәхет, үҙе бер мәртәбә. Альбина һөйләүенсә, Галина Павловна әжәле яҡынлашыуын тойған булһа кәрәк. Яҡты донъя менән хушлашыр алдынан үҙе булдырған, үҙе асҡан Үҙәккә төшөп, бөтәһенә лә матур йылы һүҙҙәрен әйтеп сыға. Бер нисә көндән бар Рәсәйҙе шаңҡытҡан хәбәр тарала.

Альбина Ғәйрүзованың шәхесен тапшырыуымда тулыраҡ итеп асыу ниәтем. Өфө дәүләт сәнғәт академияһында уҡыған сағында эстрада йырсыһы булырға хыяллана, бер нисә концерт ҡуйып, унлаған клип төшөрөп өлгөрә. Академияны тамамлай торған йылды ҡыҙ гастролдәр менән Белорет яғына сығып китә. Юлда автоһәләкәткә осрай. Ни ғиллә, бөтөн ере лә теүәл ҡала, әммә ауыҙы ысын мәғәнәһендә селпәрәмә килә. "Күп ҡан килгәс, нишләптер, бар тештәрем ҡойолған, тип уйланым. Ауыҙым бөтөнләй юҡ һымаҡ ине, - тип күҙ йәштәрен көскә тыйып, хәтер йомғағын тағата Альбина. - Операциянан һуң йырлау тураһында һүҙ ҙә юҡ ине. Яңынан һөйләшергә, ашарға өйрәндем", - ти ул. Академияла ҡосаҡ йәйеп ҡаршы алыусы булмай. Үҙендә көс табып, Мәскәүгә сығып китеүе, Галина Вишневскаяның алдында һынау тотоуы, ҙур ҡалала үҙ аллы тормош башлауы - һоҡланғыс. Бөгөн Альбина уҡып та, Мәскәүҙең бер юлы ике опера театрында эшләп тә өлгөрә.

Галина - Альбина. Был исемдәр ҙә оҡшаш һымаҡ. Вишневская баш ҡалаға 25 йәшендә килә. Һуғыш аслығын, үлем, етемлекте татыған, тәүге мөхәббәтен һуғыштан иҫән килеш көтөп ала алмаған, тәүге сабыйын юғалтҡан, ҡаты сирҙән үлеп терелгән, икенсегә кейәүҙә булған Галинаны Мәскәүгә сәнғәткә һөйөү, хыялдары алып килә. Альбинала бөйөк примадоннаның һыҙаттарын сыра мытмай булдыра алмайым. Йыр-моң донъяһының ишеген генә түгел, опера, хыял ишеген киң аса ул. Хыял көсө барыһын да еңә ала.

Йөҙөнә алһыулығы кире ҡайтҡан операторым менән Ләйсән Үтәшеваны төшөрөү деталдәрен һөйләшеп, киләһе осрашҡанға тиклем хушлаштыҡ.

Йондоҙҙарҙы үҙебеҙ тыуҙырабыҙ

"Ә Ләйсән ҡайҙа икән?" - фотоаппарат тотҡан мыйыҡлы йәш ирҙән һорайым. "Машинала ял итә", - тип яуап ҡайтара ул. Ҡара тонировкалы иҫкерәк "Ягуар" һәм ялтырап торған "Мерседес"ҡа ҡарап ҡуям: ҡайһыһында икән. Һәр хәлдә, яныһына үтергә рөхсәт итмәйәсәктәр: киренән тапшырыу төшөрөү майҙансығына юлланам. Яҡтыртыусы-техниктар рельс йәйә, кран, ут ҡуя. Тайминг буйынса "Ләйсән Үтәшева менән иртәнге зарядка" тапшырыуы 19:30-ҙа башланырға тейеш, әммә тығындар һөҙөмтәһендә гример һаман килеп етә алмай.

Беҙҙең осрашыу тураһында Үтәшеваның продюсеры менән өс ай элек үк алдан һөйләшеп ҡуйғайным. Ун йыл көткәнде өс ай ғына түҙермен, тип үҙемде тыныслandырып йөрөнөм. Теүәл ун йыл! Ҡасандыр "Башҡортостан ҡыҙы" журналында сыҡҡан Ләйсән тураһындағы мәҡәлә мине хайран ҡалдырғайны. Бына ул күҙ йәштәре менән дымланған хәтирә: аҡлы-ҡаралы фотола ихлас ҡыҙсыҡ әсәһен ҡосаҡлап тора. Бар донъяны таң ҡалдырған йәш гимнастканың ҙур спорттан киткән мәле ине был.

"Знакомьтесь, родное телевидение"- продюсер миллионлаған ҡыҙҙарҙың кумиры менән мине таныштыра. Һөйкөмлө, ябай, тамсы ла эрелеге юҡ Ләйсәндең. "Родное ТВ"-ны күреү менән ҡосаҡҡа ташланырға тейешме ни инде: аптырашып, бер-беребеҙгә ҡарап ҡаттыҡ. Уңайһыҙ хәлдән йүгереп ингән гример ҡотҡара: йондоҙҙо бизәргә тотона. Ул арала һорауҙарымды яуҙыра башлайым.

Ләйсән тураһында артыҡ яҙып тороуҙоң кәрәге лә юҡтыр. "Медиа-шәхес"тең тормошо былай ҙа асыҡ, барыбыҙға мәғлүм. Унан әйтеп биргеһеҙ энергия тулҡындары килгәндәй. Журналист булараҡ, телмәренең йөкмәткеле, тәрән мәғәнәле һәм хис-тойғоға бай булыуын да иғтибарһыҙ ҡалдыра алмайым. Тапшырыуын сценарийһыҙ һәм әҙерлекһеҙ алып бара. Шуға бер юлы ун-ун биш тапшырыу яҙырыу уға бер ни тормай. Мәскәүҙең ҡәтғи график буйынса эш итеүен һәм йәшәүен төшөнгән кеше булараҡ, күҙ һәм кадр көйөгө булыуҙы хуп күрмәнек, сығыу яғын ҡараныҡ.

Осрашыуыбыҙ икенсе көндө лә дауам итте. Мәскәүҙең М. Горький исемендәге иң ҙур мәҙәниәт һәм ял паркында үтәсәк мәрхәмәтлек акцияһында Ләйсән дә ҡатнаша ине. Ҡәһүә-күмәс сәйнәп торған Сергей Лазаревты күреп, иҫем китмәүемә үҙемә-үҙем аптырап, вип-зона журналистары араһына инеп юғалдым. Федераль канал исемдәре яҙылған микрофондар өйөмө араһына үҙебеҙҙең сапсан төшөрөлгәнен дә һондом. Бында айырым интервью алыу тураһында һүҙ ҙә бармай. Шулай ҙа, эре генә ҡыланып, буласаҡ документаль фильмым өсөн бәләкәс кенә әңгәмә ҡороп өлгөрҙөм. Кем белә донъя хәлен, йондоҙҙоң үҙ ҡануны. Боролоп китте барҙы, алдан һөйләшелгән интервьюға хуш тип кенә ҡалырға тура килер йә.

Шул арала парктың быуа буйында урынлашҡан ҡиммәтле генә ресторанына инеп, менеджерға Ләйсән Үтәшева менән интервью эшләйәсәгем тураһында үтенесемде ярып һалдым. Әллә үҙем, әллә Ләйсән шәп, шунда уҡ риза булдылар, ниндәй канал тип тә һораманылар. Мәрхәмәтлек акцияһы майҙансығынан алыҫыраҡ булғас, ризалашмай китеп барырмы икән, тигән ҡурҡыу алды мине. Һаман да журналистар менән ҡамалған Ләйсәнгә килеп, интервью урынын аңлаттым. Ҡаршы килмәне. Мәскәү коллегаларын ҡалдырып, бригада менән ресторанға юлландыҡ. Ара йыраҡлығы һиҙелмәһен өсөн китеп барғанында съемка, интервью үткәрҙек. Әйткәндәй, мускулдары араһынан ике күҙен генә йылтыратып, һәр ерҙә "һиҙҙермәй" генә бер ир оҙатып йөрөнө. Урынға килеп еткәндә, Ләйсәнгә тағы ла нығыраҡ ғашиҡ булып өлгөргән инем. Бергә ашап-эскәндән һуң, ике сәғәтлек әңгәмә ҡорҙоҡ. Ләйсәнгә үткәненә яңынан байҡау яһау, йәрәхәттәрен, спорттан киткән мәлдәрен хәтерләү еңелдән булманы. Әммә Ләйсәндең бөтөн һорауға ла тулы, матур, образлы яуап биреүе һоҡландырҙы. Уны тыңлай барам, ҡанаттарым үҫә бара. Әңгәмәбеҙ тәү сиратта "Несломленная" китабы тирәләй барҙы. Көндәлектәренә нигеҙләнеп, әсәһенең ижад емеше был. Исемен дә тап ул уйлап тапҡан. Әммә Ләйсәндең: "Не хочу быть несломленной!" - тиеүе шаңҡытты. Эйе, көрәшеп арыған ҡыҙ. Спорттағы көнсөллөк, аяҡ салыуҙан башлап, бөгөнгө уйлап табылған имеш-мимештәргә тиклем. "Һөйгән һәм һөйөлгән ҡатын-ҡыҙ, әсә булғым килә", - ти ул. "Яңы китап булырмы?" - тигән һорауыма ул, буласаҡ, тип яуап ҡайтарҙы...

Йондоҙҙарҙы үҙебеҙгә үҙебеҙ яһайбыҙ, тигән фекерем бар минең. Ысынлап та, ҡайһы бер "ҡыуыҡтарҙы" үҙебеҙ өрөп ҡабартабыҙ. Ә ҡайһы бер ысын йондоҙҙарҙы үҙебеҙ бысратабыҙ, тормошобоҙҙоң яҡты күгенән ҡутарып ырғытырға тырышабыҙ, һоҡлана, ғорурлана белмәйбеҙ. Әлшәй ерендә тыуып үҫкән ҡыҙсыҡтың донъя тетрәтеп йөрөгәненә көнләшәбеҙ, бысраҡлыҡтар эҙләйбеҙ. Күҙ йәштәрен тыйып, тешен ҡыҫып, ул һаман алға атлай. Ныҡышмаллығын, көсөн алдында баш эйәм, Ләйсән...

Фотоаппарат тотҡан кисәге ирҙән Ләйсән менән фотоға төшөрөүен үтендем. Бындай нәмәне йәнем һөймәй, әммә һынлы гимнастика алиһәһе Ләйсән Үтәшева менән осрашыуымда тәрән тарихи мәғәнә күрҙем. Ҡалған көнөмдө ҡанатланған шикелле осоп йөрөп үткәрҙем.

Күндәмлекме бәхет асҡысы?

Төрлө уйҙарға юлыҡтырыр осрашыуҙар, сәйер һәм ҡыҙыҡлы күренештәр, ваҡиғалар алда ла көтә ине мине. Экранға түгел, әммә тормош сценарийыма инеп ҡаласаҡ Гөлдәрҙе урап үтә алмайым. Уның менән беҙ киске 7-лә, Мәскәүҙә нисә ҡат булып, бер барып урамаған билдәле Иҫке Арбат урамында осрашырға һүҙ ҡуйыштыҡ.

Иҫке эшләпәһен кейеп, моңһоу күҙле егеттең илһамланып шиғыр һөйләүе, оҙон сәсле йәштәр оркестрының заманса көйҙәр уйнауы, урта йәштәрҙәге ирҙең гитарала элиталы бардты хәтерләткән көйҙә сиртеүенә буталған халыҡ мыжғып торған Мәскәүҙең был урамында бер-береңде табыуы еңелдән түгел. Ҡара зәңгәр төҫкә буялған, эштән сыҡҡан ике иҫке троллейбус вагонынан ғибәрәт кафены маяҡ итеп билдәләнек. Ниһайәт, "мәскәүсә" кейенгән Гөлдәр күренде. "Мәскәүсә" - ул метрола һыҙырылып-йыртылып юҡҡа сыҡмаһын өсөн кейелә торған кейем. Һәр төрлө сит телдәр яңғыраған, сит ил йөҙҙәре ҡыймылдашҡан кафеға инеп ултырабыҙ. Бер ни тиклем ваҡыттан өҫтәлебеҙҙә һуңғы арала милли ашҡа әүерелеп барған япон ролдары пәйҙә була.

"Әсәйем менән сираттағы әрләшеүҙән һуң, түҙмәнем, "Өфө-Мәскәү" поезына билет алып, өйҙән сыҡтым да киттем. Юғары уҡыу йорто тамамланмай ҡалды. Машина йыуыусы булып эшләнем тәүҙә. Мойканың үҙендә каморкала йәшәнем. Һуңғараҡ бер урыҫ егете менән танышып, уның менән бергә йәшәй башланыҡ. Белмәйем, мөхәббәт бар кеүек ине, аҙаҡ ике йыл дауамында тормошом йәшәү урыны булһын өсөн теш ҡыҫып түҙеүгә әүерелде. Әле Өфөгә ҡайтырға йыйынам, әсәйем аҡса ебәрҙе". Был - күрше өҫтәл артына инеп тулып, һыра һемергән Ҡытай егеттәре шау-гөрө аша ишетелеп ҡалған Гөлдәрҙең тормошонан бер өҙөк. Гөлдәр һорауҙарыма ихлас яуап биргәндәй, әммә хис-тойғоға бирелеп бармай. Әйтерһең, тормошоноң ошолай ағышына бер кем дә ғәйепле лә, бурыслы ла түгел.

Барыһын нисек бар - шулай ҡабул итергә өйрәнгән. Мәскәү уны шулай баҫҡанмы, әллә ысынлап та барыһына ла риза булыу, бөтөн нәмәнең дә ыңғай яғын күреүҙә бәхет асҡыһын тапҡанмы? Әллә бөтөн ваҡиғаларға ла рәхмәт әйтеп, тормошто үҙгәртергә тырышмай йәшәү дөрөҫмө икән? Ҙур ҡалаға сарыф иткән ике йылын да файҙалы үтте, ти Гөлдәр, үҙаллы йәшәргә өйрәндем, ти. "Өфөлә машина йыуыусы булып эшләр инеңме?" тигән һорауыма ғәҙәти ғәмһеҙ тауышы менән ҡыҫҡа ғына "Юҡ!" тип яуап ҡайтарҙы шулай ҙа. Метроға тиклем бергә атлап килдек. Был бөтөн осрашыуҙарымдың иң ҡыҫҡаһы, әммә иң файҙалыһы булғандыр...

"Һоролоҡ араһында йондоҙ булғансы, йондоҙҙар араһында ҡара нөктә бул", ти берәүҙәр. "Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул", ти башҡорт халыҡ мәҡәле. Инде күпме мәҡәлә яҙып, телевизион тапшырыу, радиоэфирҙар сығарып, үҙ ереңдә үҙ алтындарыңа күмелеп йәшәүҙе яҡшы, тип иҫбат итеп ҡуйҙыҡ. Әммә һаман да ҙур ҡалаларға, сит илгә халыҡтың ағылыуы дауам итә. Ҡасан булһа ла һәр кем алдына килеп баҫа был һорау. Бөрйән һылыуы йә егете 11-сене тамамлау менән күп осраҡта ҙур ҡала - Өфөгә атыла. Завод газдары борҡоп торған, ҡараңғы Черниковканың һирәк-һаяҡ һерәйешеп ҡалған тирәктәре мамыҡ осорған, тотошлайы менән машина тығынына әүерелеп барған Өфөнө бер көн килеп Мәскәүгә алмаштырыу хыялы килеп тыуа бәғзе берәүҙә. Ҡайһыларға сит ил алтын-зөбәржәттәре сағыуыраҡ күренә.

Глобализация заманында ил тигән төшөнсә нимә менән үлсәнә һуң? Донъяның бар байлыҡтарына эйә булғандар айлыҡ сәйәхәттәргә билеттарҙы берәр йыл алдан һатып алып ҡуйғанда, алыҫ йондоҙҙо ғына түгел, хатта галактикаларҙы Йыһан киңлектәренә сығып күҙәткәндә, "ил" төшөнсәһе ҡайҙа тороп ҡала? Эйе, Ер шарының тик бер генә мөйөшө яҡын була, ул - тыуған ерең. Тик уға солтан булғандар башҡаларҙы олтан итә түгелме? Ниндәй солтанлыҡҡа ынтылырға һуң? Тормоштоң фани байлыҡтарынамы, әллә күңел һәм аҡыл байлыҡтарынамы?

Ә хыял? Уға ниндәй мөнәсәбәттә булырға? Ваҡыт, йәш төшөнсәһе хыялға өлгәшеүҙә ниндәй урын биләй? Үҙ бәхетеңде бәләкәй генә Өфөлә тапмағанды, әллә нисә миллион кеше мыжғып торған ҡала эскалаторҙары йән яртың менән осраштырырмы? Бәхет эҙләмә, үҙең бәхет бул, үҙеңде табыу түгел, үҙеңде тулы шәхес итеп тойоу мөһим. Хыял ишеге... Уның ҡайһыһы һинеке һуң? Һорауҙарым һаман артымдан эйәреп йөрөй. Икенсе юлы Мәскәүгә барыуыма тиклем улар мейем лабиринттары араһында аҙашып йөрөп торор, күрәһең...

Гөлназ ҒӘЛИМУЛЛИНА.

(Аҙағы. Башы 23-сө һанда).

ДОНЪЯБЫҘ ТОТҠАҺЫ...

донъя ҡәҙерен белгән ирҙәрҙә

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

Атайыбыҙ 1993 йылда 57 йәшендә генә вафат булып ҡуйҙы. Ул саҡта мин студент ҡына инем әле.

Эйе, егет кешегә тәрбиәне тап атай кеше бирергә тейеш. Был яҡтан мин үҙемде бәхетлеләр рәтенә индерәм. Атайым йыш ҡына: "Кешенекен алма, кешене илатма, ауыҙыңда ҡан булһа ла, кеше алдында төкөрмә", - тип өйрәтер ине. Ул ваҡытта бик үк әһәмиәт бирелмәгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, үҫә төшкәс, барыбер иҫкә төшөрәһең икән. Егет кешегә әсәй тәрбиәһе лә кәрәк, әлбиттә. Ләкин ир-егет төп тәрбиәне барыбер атаһынан ала.

▸ Ә үҙегеҙҙең улығыҙға ниндәй атай тәрбиәһе эләгә һуң?

- Урал улыма әле ете йәш, шулай булһа ла, мин уға әле үк байтаҡ аҡыл-һабаҡтар бирергә тырышам. Мин һөйләгәндәрҙе ул күңеленә һеңдереп бара. Миңә арҡа терәргә тырыша икәнен тоям. "Атай менән беҙ дуҫтар бит ул!" - тип кенә ебәрә. Улым үҙенең йомшаҡ яҡтарын миңә бик күрһәтеп бармай. Бер саҡ әсәһе менән теш һурҙырырға барғандар ҙа, ауыртыуҙан бер аҙ илап алған, аҙаҡ үҙе ояла, ти. "Атайым ғына белеп ҡалмаһын, минең илағанды уға әйтеп ҡуйма", - ти икән үҙе.

Атай менән ағас әҙерләргә урманға барһаҡ, мин, үҫмер малай, ағастың йыуан яғына барып сат йәбешкән була торғайным. Йәнәһе, үҙем көслө булғас, атайҙы ҡурсалайым. Ә атай, минең тәжрибәһеҙ булыуыма ишаралап, "Ҡуй улым, һиңә ауыр күтәрергә кәрәкмәй", ти торғайны. Урал улым да, берәй нәмә күтәрергә кәрәк булғанда, ауырыраҡ яғына үҙе барып баҫҡан була. Тимәк, сая холҡо бар, тип һөйөнәм. Тарих ҡабатлана. Быуындар күсәгилешлеге шунда күренәләр инде. Мин улыма тиң итеп ҡарайым. Атайым да миңә шундай мөнәсәбәттә булды. Шулай ҙа мин атайҙан шөрләй торғайным. Улым минән ҡурҡмай шикелле. Ҡайһы берҙә тураһын да әйтеп ташлай. Беҙ ғаиләлә тик башҡорт телендә генә аралашабыҙ. Бер көндө мин ниндәйҙер һүҙҙе русса әйтеп ысҡындырғайным, Урал: "Атай, ниңә ул һүҙҙе русса әйтәһең? Ул бит башҡортса шулай була", - тип, мине төҙәтеп ҡуйҙы. Тағы, бер мәл улым менән урманда һунарҙа йөрөп ятабыҙ. Бер йырынға килеп еттек тә, теге ярға һикереп сығырғамы, юҡмы, тип, күстәрҙе самалап тора инем, улым уйҙарымды бүлде: "Атай, беҙ бит Байғусҡаровтар! Беҙгә был йырын ғына нимә ул!" - тимәһенме! Тәүәккәлләп, йырынды үтеп китергә тура килде.

▸ Башҡорт ғаиләләрендә туған телгә өйрәтеү мәсьәләһендә барыбер кәртәләр бар әле һәм уны танымай булмай. Ул яҡтан һеҙҙең ғаилә башҡаларҙан айырылып тора. Балаларығыҙҙың башҡортса һөйләшеүендә әсәләренең өлөшө күберәкме, әллә һеҙҙекеме?

- Кәләшем кем генә булһа ла, минең ғаиләмдә башҡорт теле барыбер "дәүләт теле" булыр ине. Сөнки мине атайым шулай тәрбиәләне. Атайҙың рухи тәрбиәһе нимәләрҙә сағыла? Ул тарихты бик һәйбәт белде. Йыш ҡына мине берәй ергә алып бара ла, шул урын менән бәйле тарихи ваҡиғаларҙы ваҡыты менән иҫләп һөйләп бирә торғайны. Мәҫәлән, бер ваҡыт ул мине "Нуғай ҡәберлеге" тип аталған урынға алып килде. Баҡтиһән, ҡасандыр ошо ерҙә башҡорттар менән нуғайҙар араһында яу ҡупҡан икән. Нуғайҙар үҙҙәренең һәләк булған яугирҙарын ошонда күмгән. Тағы бер урынға барыуыбыҙ хәтерҙә. Ерҙе ҡаҙғайныҡ, көл ята. Беҙҙең ауылдың элекке нигеҙе булған икән. 1766 йылда булһа кәрәк, бер ихтилал ваҡытында ауыл яндырылған. Был хәлдән һуң халыҡ ауылдың хәҙерге урынына килеп, нигеҙ һалған. Атайҙан тарих һабаҡтары алғанғалыр, тарих фәнен бик яраттым. Башҡорт яҙыусыларының тарихи романдарын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып сығам. Шулай итеп, әҙәбиәттең башҡа жанрҙарына ла ҡыҙыҡһыныу уянды. Мин уҡымаған роман, башҡорт шиғриәте классиктары әҫәрҙәре ҡалмағандыр. Бөтә ошо рух үҙенән-үҙе беҙҙең балаларға ла һеңәләр инде.

Тағы шуны әйтке килә: күптәр үҙ балаларының туған телдә һөйләшмәүенең сәбәбен мәктәптән күрә. Ғаиләлә тәрбиә булмаһа, һөҙөмтә булмай ул. Туған телдә һөйләштереү генә етмәй - балаға үҙенең тамырҙарын да белдерә йөрөргә кәрәк. Мин яңыраҡ, май байрамдарында, улымды ауылыбыҙға алып ҡайтып, картатаһының ҡәберен күрһәттем. Уны тәртипкә килтерҙек. Бала саҡтан ошондай урындарға алып йөрөмәһәң, ҙурайғас, һуң буласаҡ.

Эш менән дә тәрбиәләйбеҙ балаларҙы. Ялдарҙа һәр ваҡыт баҡсаға барабыҙ. Балаларҙың сәләмәтлеген дә атай кеше ҡайғыртырға бурыслы. Атай беҙҙе мунсала ҡайын миндек менән яҡшылап саба ла, күтәреп алып сығып, көрткә ырғыта торғайны. Беҙ, аҡ айыу балалары шикелле, ҡарҙан алпан-толпан атлап, килеп сығабыҙ. Балаларҙы шулай сыныҡтырыуҙы мин дә үҙ өҫтөмә алғанмын.

Һеҙҙең яҡын дуҫтарығыҙ бармы? Эс серҙәрегеҙҙе һеҙ кем менән бүлешәһегеҙ?

- Эсемдәге серҙәремде үҙемдә һаҡлайым. Дуҫтарға килгәндә, улар бар, ләкин аралашырға ваҡыт ҡына етмәй. Мин ошоға тиклем бер тапҡыр ҙа эшемдән киске ундан да иртәрәк ҡайтҡаным юҡ. Судья булып эшләгән саҡта бөтөнләй төнгө ун икеләрҙә ҡайтып ауа инем. Тамамланмаған эшем торһа, күңелем тыныслыҡ тапмай. Хатта ҡатыным Гөлназ менән ("Тамыр" балалар телестудияһы директоры Гөлназ Ҡолһарина. - **Ред.**) өйләнешкәндә никахыбыҙға ла, хөкөм ҡарары яҙып ултырып, ҡайта алмай ҡалдым. Никахта минең урыныма бер туған ағайым ултырҙы. Шулай ҙа, туйға ваҡытында ҡайтып еттем, гөрләтеп туй үткәрҙек.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Был осрашыуҙан ниндәйҙер ҡанатланыу, талпыныу менән ҡайтылды. Бына нисек алтын урталыҡты тотоп йәшәргә, эшләргә, үҙ маҡсаттарыңа өлгәшергә, ҡатмарлы тормош һынауҙары үтеп тә, үҙең булып ҡалырға була икән, тигән фекер нығынды. Ә бит Зариф Закир улы бындай йәшәйеш асылын ниндәйҙер уҡыу йорттарында түгел, ә ғаиләлә, атай тәрбиәһе өлгөһөндә, тыуған тәбиғәте йоғонтоһонда, туған тел аша үҙләштергән. Ошондай ирҙамандарыбыҙҙың ошондай йәшәйеш асылы милләттең, республиканың, хатта тотош илдең бөтөнлөгөн тәьмин итә түгелме ни?!

Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

БИГЕРӘК ЭРЕ...

жәптекә

Ыуҙым-һыуҙым - хәйләләп эшләнем
Баҫтырыҡлап ҡуйыу - ныҡ йәшереү
Әхем-төхөм генә - насар ғына эшләү
Ҡашы бар, ашы юҡ - үҙе биҙәнгән, өйөндә тәртип юҡ
Эт ҡайышы - үтә әрһеҙ, оятһыҙ
Талаҡһыҙ - ни бар, тотош ашай
Ҡыу ҡарама - йомоҡ, асыулы кеше
Ни көй, ни һөй - ни һөйләгәнен, эшләгәнен белмәй
Ғәйдүкәй - бушҡа донъя ҡыҙырыусы әҙәм
Аҡ митҡал - үтә йоҡа ситса йәки марля
Күләткә - кеше ышығында йөрөүсе
Бәйнәт - торғаны бер бәлә
Ҡамаҡаш - тештәрҙең ите (десны)
Шылғый - алдаҡсы, ҡасырға ғына тора
Тәпәрлеш - бөкләнеп бөткән кейем-һалым
Торжағыны терәлгән - ныҡ асыҡҡан
Баҙ бәбәк - һәр хәрәкәтте күҙәтә
Кәүен генә инде - үтә еңел, үтә ябыҡ
Араны асыҡ - сер һаҡламай, ауыҙында һүҙ ятмай
Ҡара бауыр - изгелекһеҙ, ҡаты күңелле
Ҡыя һуҡҡан - асығып килеп, күп аҙыҡты ашаған
Дөмбәй - өс литрлыҡ йомро банка
Дөмдөрөнә биргәндәр - туҡмағандар, кәрәген биргәндәр
Ыша бирмәй - бирешмәй, үҙенсә эшләй
Һыҡый - ҡоро аҙыҡ тамаҡҡа йәбешә, ултыра
Тыптың - тығыҙ ғына булып бешкән, ныҡ тултырылған
Элкәп алыу - тиҙ генә еңелсә кейенеү
Аты юлы менән - һүҙҙең йәки эштең үҙ исеме менән әйтеү
Эттән оло, минән кесе - йомош ҡушҡанда әйтелә
Жәптекә - үтә эре кеше
Әгез-өгөз, бер мөгөҙ - булды ни ҙә, юҡ ни, тип йәшәүсе
Һыңар балаҡ - эшен башлап, ташлаусы
Ҡәһәрән - бер тин, бер семтем тип һораныусы
Шыҡы ҡоя - ҡоторона
Шойҡоно тейгән - ғәйепһеҙгә ғәйепләнеү
Ырыҡ-тырыҡ - һәр кем үҙенсә
Шаҡ ҡатҡанға юл ҡайҙа - эшләмәй, ҡатып ҡарап тороусыға әйтелә
Шиштерка - бер нәмәне төрлөсә һөйләүсе

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Рәсилә Вәлиеваны үҙебеҙҙең ауылға саҡырҙыҡ. Был кәсепкә яңыраҡ ҡына тотонһаҡ та, уңыштарыбыҙ ҙа бар: 100 мең һумлыҡ грантҡа лайыҡ булдыҡ, Өфөлә Арт-күргәҙмәлә ҡатнашырға насип булды.*

ИНТЕРНЕТТАН

БӘХЕТЛЕ КЕШЕ... ниндәй була?

■ Йоҡлай алмау кешенең баш мейеһе өсөн бик хәүефле, тип белдерә Калифорния Пасифик медицина-тикшеренеү үҙәге ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә йоҡоһоҙлоҡтан һәм хәтер юғалтыуҙан яфаланған 2820 кеше ҡатнашҡан. Әгәр ҙә бер-ике көн генә насар йоҡлаһа ла, аҡыл эшмәкәрлеге 50 процентҡа түбәнәйә, кеше ҡарар ҡабул итә, эштәрен планлаштыра алмай йонсой. Бер генә йоҡоһоҙ төн баш мейеһендә үҙгәрештәр барлыҡҡа килтерә, уларҙы баш мейеһе йәрәхәтенә тигеҙләргә була, ти Упсала университеты ғалимдары. Баҡтиһәң, йоҡлаған саҡта баш мейеһе токсиндарҙан таҙарына, әгәр ҙә был эш боҙолһа, шунда уҡ негатив үҙгәрештәр барлыҡҡа килә.

■ Кеше үҙенең бәхет кимәлен үҙе генә күтәрә ала. "Нисек бәхетле булырға" тип аталған китаптың авторы, яҙыусы Соня Любомирски ошо мәңгелек һорауға яуаптар эҙләп, шундай һығымтаға килгән. Билдәле булыуынса, бәхеткә ынтылыу кешелә тыумыштан була һәм нәҫелдән билдәләнә. 10 процент бәхет беҙҙе уратып алған мөхиттән, ҡалған 40 проценты кешенең үҙенән тора. Соня Любомирскиҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, бәхеттең тәүге ҡағиҙәһе - үҙеңдең тойғоларыңды контролдә тотоу. Икенсеһе - насар хәтер, сөнки был фактор кешеләргә асыу һаҡламаҫҡа һәм ғәфү итергә өйрәтә. Өсөнсө фактор - үҙеңде ярата белеү. Дөрөҫ тукланыу, спорт менән шөғөлләнеү, йоҡо туйғансы йоҡлау аҡыл һәләттәрен дә үҫтерә. Яҡындарың һәм дуҫтарың менән аралашыу - шулай уҡ мөһим нәмә. Әммә автор билдәләүенсә, иғтибарыңды һеҙгә ысынлап та ҡәҙерле булған кешеләргә генә бүлергә ярай. Бишенсеһе - үҙегеҙҙе башҡалар менән сағыштырмағыҙ, уларҙан көнләшмәгеҙ. Һәр кеше уникаль, һеҙгә идеаль булып күренгән шәхестең дә етешһеҙлектәре була. Башҡаларға яҡшылыҡ эшләргә тырышыу ҙа үҙеңде бәхетле тойорға ярҙам итә. Тағы бер кәңәш - үткәндәр менән түгел, бөгөнгө көн менән йәшәгеҙ. Эргә-тирәңдәгеләргә, яҙмышыңа рәхмәтле була белеү, бер нәмәнән дә ҡурҡмау бәхетле тормоштоң төп шарттары булып тора.

■ Япония ғалимдары ҡайһы бер еҫтәрҙең кешенең сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһауын, хатта ҡандың химик составын үҙгәртергә һәләтле булыуын раҫлаған. Мәҫәлән, стресс ваҡытында үҙеңә оҡшаған эфир майының еҫе көсөргәнештән арындыра, тынысландыра, депрессиянан ҡотҡара. Бер төркөм ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, лимон, манго, ала миләүшә еҫе тап ошо сифаттарға эйә.

■ Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары көрпәһенән таҙартылмаған ондан бешерелгән икмәктең файҙалы яҡтарын асыҡлаған. Ул ҡандағы шәкәрҙе түбәнәйтеп, икенсе типтағы диабет үҫеше хәүефен юҡҡа сығара. Ҡара икмәк инсулинға реакцияны ла яҡшырта, ә аҡ икмәктең ауырығандарға ла, сәләмәт кешеләргә файҙаһы бөтөнләй юҡ тиерлек. Көрпәле икмәк метаболизмға яҡшы йоғонто яһай, шуға ла ул диабеттан һаҡлаусы иң яҡшы сара тип табылған. Икмәктең был төрө ябығырға теләүселәргә лә ярҙам итә. Көнөнә бер нисә киҫәк икмәк ауырлыҡты нормала тотасаҡ, организмдағы майҙарҙан да ҡотҡарасаҡ.

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

ВӘҘӘМДӘР ШӘЛДЕ БӘЙЛӘМӘЙ,

вәҙәмдәр шәлде һуға...

Баймаҡ, Әбйәлил, Белорет, Учалы, Йылайыр райондары, Сибай ҡалаһы өлгөһөндә былтыр беҙҙең районда ла "Ағинәйҙәр ҡоро" ойошторолдо һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә күп кенә маҡтаулы эштәр башҡарыуға ирештек. Бына әле лә районыбыҙҙың бөтә ауылдарының ағинәйҙәре етәкселәре Вәҙәм ауылында үтәсәк ҡорға юл алды.

Оло быуын кешеләренең яуаплылығына, дәртенә хайран ҡалырһың - билдәләнгән ваҡытҡа йыйылып та бөттөләр. Автобуста урын етмәне хатта. "Йыр ҡыҫҡарта оҙон юлдарҙы", тигәндәй, йырлай-йырлай барғас, юлдың алыҫлығы ла һиҙелмәй ҡалды.

Вәҙәм ауылының һабантуйҙар үтә торған йәмле аҡланында халыҡ гөж килә, усаҡтар төтәй, самауырҙар ҡайнай. Ауыл ағинәйҙәре һәм мәктәп уҡыусылары ҡунаҡтарҙы күпереп бешкән икмәк һәм кәзә һөтөнән яһалған ҡымыҙ менән ҡаршы алғандан һуң, йола буйынса, йыр-бейеүҙәр башланып китте.

Сараның рәсми өлөшөн асып, райондың "Ағинәйҙәр ҡоро" етәкселәһе Миңзифа Ишемғолова: "Беҙ бөгөнгө йыйынды үткәреү урыны итеп юҡҡа ғына Вәҙәмде һайламаныҡ. Улар үҙ тырышлығы менән өләсәйҙәребеҙҙең онотолған кәсебе - шәл һуғыуҙы яңыртып ебәрҙе, республика кимәлендә үткәрелгән сараларҙа ла ҡатнашып торалар",- тине ул. Шулай уҡ Миңзифа Ибраһим ҡыҙы Садовый, Татырҙәк, Подольск, Ергән, Әбүбәкер, Йәнтеш һәм башҡа ауыл ағинәйҙәренең әүҙемлеген билдәләп үтте.

- Беҙ аҡыл, тәжрибә туплаған оло быуын вәкилдәре буларбыҙ, йәштәргә, балаларға өлгө булырға, уларға онотолған йолаларҙы тергеҙеүҙә булышлыҡ итергә, халҡыбыҙҙың боронғо кәсептәрен өйрәнергә тейешбеҙ. Ошо эштәребеҙ менән ауылдарыбыҙға йәм өрөргә тейешбеҙ. Бөгөнгө йыйындың төп маҡсаты шундай бурыстарыбыҙҙы барлау, уртаға һалып һөйләшеү, булған тәжрибәбеҙ менән уртаҡлашыу. Был байрамда балалар ҙа ҡатнаша, улар беҙҙе тыңлап, күңелдәренә һеңдереп торһон, әйҙә, - тип йомғаҡланы һүҙен район ағинәйҙәре етәкселәһе.

Муниципаль район хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге баш белгесе Роза Рәсембәтова үҙ сығышында ҡатын-ҡыҙҙар араһында "йәшел йылан" менән мауығыусыларҙың кәмемәүе, бигерәк тә йәш әсәләрҙең эскелеккә бирелеүе тураһында борсолоуын белдерҙе. Ошо проблеманы хәл итеүҙә ағинәйҙәрҙең роле тураһында һөйләп: "Һәр кем үҙ ғаиләһенән, үҙ яҡындарынан башлаһа ине, әйҙәгеҙ, айыҡ байрамдар, айыҡ туйҙар үткәрәйек", - тип мөрәжәғәт итте ул.

Яҡташыбыҙ, "Йәншишмә" гәзитенең баш мөхәррире Мирсәйет Юнысов та килгәйне байрамыбыҙҙы уртаҡлашырға. Ошондай байрамдарға балаларҙы йәлеп итеүҙең файҙалы яҡтары тураһында бәйән итте ул һәм бөгөнгө сараның үҫеп килеүсе быуын күңелендә ғүмер буйына һаҡланасағына ышаныс белдерҙе.

Йәнтеш ағинәйҙәре етәкселәһе - билдәле сәсәниә Фәниә Арыҫланова ағинәйҙәргә мөнәжәтен бағышланы, ауыл ағинәйҙәренең тәрбиәүи һәм дини юҫыҡтағы эштәре хаҡында бәйән итте. Шулай уҡ Аҡъяр ағинәйҙәре етәкселәһе Менәүәрә Бохарбаева, Ергәндән Суфия Билалова, Садовый ауылы абыстайы Флүрә Ниғәмәтовалар ҙа эш тәжрибәләре менән уртаҡташты. Һаҡмар-Наҙароғол ауылынан йәмәғәт хәбәрсеһе Рәшиҙә Сәйфуллина ауылдаштары менән ғорурланыуын йәшермәне. "Беҙҙә эскән кеше юҡ, бөтә байрамдар, ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнашлығындағы өй йыуыу, һарыҡ ҡырҡыу, кәзә тарау, ирҙәр ҡатнашлығындағы утын, бесән әҙерләү кеүек өмәләр, бер-беребеҙгә ярҙам итешеүҙәр эскеһеҙ үтә", - тип һөйләне һәм "Айыҡ ауыл" акцияһына ҡушыласаҡтары тураһында белдерҙе.

Бына ҡорҙоң тағы бер мөһим мәле етте - Вәҙәм ауылының сағыу төҫтәге милли кейемдәр кейгән ағинәйҙәре һәм шәл оҫталары кәзә аҫырау, дебет эшкәртеү нескәлектәре менән уртаҡлашырға ниәтләп, һуҡма шәл һуғыу станоктары теҙелгән яҡҡа ҡуҙғалды. Оҫталар Гөлназ, Рәйхана, Нурсиә, Сәғиҙә, Миңзәлә, Әнүзә Суриналар, Хәмдиә, Мөнирә, Тәнзилә Күскилдиналар, Зәкиә Мусина, Клара Ыласыновалар теҙелешеп ултырып, дебет иләп, нуғып, ҡабалап, йыйылыусыларға эш процесын күрһәтте. Арыраҡ бәйләнгән, һуғылған шәлдәр, косынкалар, шарфтар, төрлө төҫтәге ептәр менән биҙәлгән баласаҡтар күргәҙмәһе урын алды. Шәлдәрҙең ниндәйе генә юҡ: ағы, ҡараһы, шаҡмаҡлыһы, бәләкәйе, юрғандай ҙурҙары. Үҙҙәре шундай йомшаҡ, еңел!

Ошо боронғо кәсепте башлап ебәреүсе һәм ойоштороусы, дәрте ташып торған Гөлназ Сурина менән әңгәмәләштек. "Ауылыбыҙ килене, билдәле журналист Сәрүәр Суринаның идеяһы менән тотоноп киттек был эшкә, - тине ул. - Уның тәҡдимен хуплап, музейҙан иҫке генә станок алып ҡайтып, етешмәгән өлөштәрен үҙем яһап, Фәүзиә апай Кәримованы саҡырып, унан шәл һуғырға өйрәндем. Әммә станок үтә иҫке булғанлыҡтан, эште тиҙ генә көйләп китеп булманы. Минең был эш менән шул тиклем ныҡ мауыҡҡанды күреп, тормош иптәшем Риф ярҙамға килде һәм станок эшләп бирҙе. Хәҙер дүрт станок эшләне инде ул. Станоктар әҙер булғас, Шунан Әбйәлил районынан Рәсилә Вәлиеваны үҙебеҙҙең ауылға саҡырҙыҡ, ул ике көн буйы шәл һуғыуҙың нескәлектәрен төшөндөрҙө, уға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Был кәсепкә яңыраҡ ҡына тотонһаҡ та, уңыштарыбыҙ ҙа бар: 100 мең һумлыҡ грантҡа лайыҡ булдыҡ, Өфөлә Арт-күргәҙмәлә ҡатнашырға насип булды".

Риф Суриндан өйрәнеп, Азамат Сурин да Флярит һәм Муса Суриндарҙы ла йәлеп итеп, бригада ойоштороп ебәрә, улар станоктан тыш, ултырғыстар, һандыҡтар, умарталар, рамдар яһау менән шөғөлләнә.

"Бер атыуҙа - ике ҡуян" тигәндәй, вәҙәмдәр район ағинәйҙәренә "Кәкүк сәйе" йолаһын да күрһәтеп, ҡунаҡтарҙы ҡуҙғалаҡлы өйрә, буҙа, кәрәҙле бал һәм башҡа милли ризыҡтар менән һыйланы. Тәмле сәй табыны артында ла фекер алышыуҙар дауам итте.

Бына шулай бик күңелле һәм эшлекле шарттарҙа үтте ағинәйҙәрҙең район йыйыны. Был осрашыу байрамда ҡатнашыусылар күңелендә матур хәтирә булып, оҙаҡ һаҡланыр әле.

Фәриға КҮСӘКОВА.
Хәйбулла районы Таштуғай ауылы.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

ЮНЫС БӘЙҒӘМБӘР ДОҒАҺЫ

Бәйғәмбәрҙәр тормошо ғибрәтле, һәр заманға нәсихәт бирә алырҙай ваҡиғалар менән тулы. Улар менән булған хәлдәр йөрәктәрендә ғәфләткә урын булмаған мосолмандарға һабаҡ, фәһем ул. Юныс бәйғәмбәр менән булған бер хәл хаҡында һөйләп китәйек.

Оҙаҡ йылдар халҡына нәсихәт алып барған Аллаһ нәбие, ҡәүеменең тупаҫлығына һәм тиҫкәрелегенә түҙмәйенсә, уларҙы ҡалдырып китә. Ҡорьән-Кәримдә был турала: "Балыҡ хужаһы Зүннүн (Юныс) тураһында ла онотмағыҙ. Ул (үҙенең ҡәүеменә) бик ныҡ үпкәләп, асыуланып киткән ине. Үҙенә көсөбөҙ етмәҫ, тип уйлаған ине ул", - тип әйтелә. Был аҙымы өсөн Аллаһы Тәғәлә уға һынауҙар ебәрә. Ул диңгеҙгә ырғытыла һәм ҙур балыҡ тарафынан йотола. Ошо саҡта бәйғәмбәр был афәттән бары тик Аллаһы Тәғәлә генә ҡотҡара аласағын аңлап, Раббыһына: "Ләә иләһә иллә әнтә, субхәәнәкә иннии күнтү мин әз-заалимиин" ("Һинән башҡа Һиңә тиң һис бер зат юҡ. Һине генә пак, тип таныйым. Ысындан да, мин ғәҙелһеҙ булғанмын икән"), - тип өндәшә. Был доға уның ҡотолоу сәбәбе була.

Ислам ғалимдары ошо доғаның серҙәрен шулай тип аңлата. Бәйғәмбәргә ҡаршы булған балыҡты, диңгеҙҙе, төндө, күкте бары Берәү генә тыңлата ала. Нәби быны аңлай һәм кешеләр, үҙенең ҡолдары һәм ярҙамсылары ла уны ошондай хәлдән ҡотҡара алмаясаҡ икәненә төшөнә. Тимәк, сәбәптәрҙең йоғонтоһо юҡ, бары ошо сәбәптәр менән Идара итеүсе генә ҙур көскә, ҡеүәткә эйә. Һәм ошо ҡараңғылыҡта Юныс бәйғәмбәр сәбәптәрҙең Сәбәпсеһе булған Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итә. Аллаһтың берлеген, хакимлығын танып ялбарылған доға, төндө лә, диңгеҙҙе лә, балыҡты ла бәйғәмбәргә бойһондора.

Ә бит һәр кемебеҙҙең хәле Аллаһ нәбиенең балыҡ эсендә ҡалған хәленә ҡарағанда меңдәрсә тапҡыр ҡурҡынысыраҡ. Бәйғәмбәрҙе уратып алған төн (ғәфләт һәм вайымһыҙлыҡ баҫҡан саҡта) беҙҙең киләсәк ул. Һәм ул теге төндән йөҙҙәрсә тапҡыр ҡараңғыраҡ һәм шомлораҡ. Кешенең диңгеҙе - туҡтауһыҙ әйләнгән Ер шары. Ер шарының тынғыһыҙ тулҡындарында, һикәлтәләрендә, боролоштарында меңдәрсә үлем йәшеренгән һәм был бәйғәмбәр яңа-яңғыҙы ҡалған диңгеҙҙән меңдәрсә тапҡыр ҡурҡынысыраҡ. Нәфсенең шәһүәттәре һәм теләктәре - ул мәңгелек баҡый тормошто юҡ итергә әҙер торған балыҡ. Был балыҡ, Юныс бәйғәмбәрҙең йөҙйыллыҡ ғүмерен алырға тырышҡан балыҡтан айырмалы, кешенең иҫәбе-хисабы булмаған мәңгелек тормошон йота. Тимәк, кешенең, йәғни беҙҙең хәҡиҡи хәлебеҙ ошондай булғас, беҙ Юныс Бәйғәмбәрҙең миҫалына эйәреп, Аллаһы Тәғәләнең сәбәптәрҙең берҙән-бер Сәбәпсеһе булыуын танып, "Һинән башҡа Һиңә тиң һис бер зат юҡ. Һине генә пак, тип таныйым. Ысындан да, мин ғәҙелһеҙ булғанмын икән", тип ялбарырға тейешбеҙ.

Был ят-доға менән, йәғни "Һинән башҡа Һиңә тиң һис бер зат юҡ" , тип, Аллаһы Тәғәләнең бөйөклөгөн, хакимлығын таныйбыҙ, шуның менән Раббыбыҙҙың шәфәғәтен - киләсәгебеҙгә, "Һине генә пак, тип таныйым" тип - был донъяға, "Ысындан да, мин ғәҙелһеҙ булғанмын икән" тип үҙебеҙҙең нәфсебеҙгә йүнәлтәбеҙ. Иман нуры менән тоҡаныу һәм Ҡорьән менән йәшәү киләсәгебеҙҙе - күңелгә рәхәт сәйәхәткә; донъяны (Ер шарын) - беҙҙе ҡотҡарыу ярына килтерәсәк кәмәгә; ә ауыҙлыҡланған нәфсебеҙҙе - Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә ирешеүгә йүнәлтелгән менге атҡа әйләндерәсәк, хәҡиҡәтте ялғандан айырырға өйрәтәсәк. Шуға ла Юныс бәйғәмбәр әйткән "Ләә иләһә иллә әнтә, субхәәнәкә иннии күнтү мин әз-заалимиин" доғаһы беҙҙең рухи ихтыяждарыбыҙҙың Раббыбыҙ тарафынан ҡабул ителеүенә сәбәпсе иткән мөһим ысул ул.

Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләне.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

ҠОЯШ НУРЫ...

файҙалымы, зыянлымы?

Һуңғы ваҡытта ҡояш нурҙарының зыянлы булыуы, тирегә насар тәьҫир итеүе тураһында күп һөйләһәҙәр. Әммә ғалимдар раҫлауынса, ҡояштың файҙалы яҡтары ла күп. Ғөмүмән, XX быуаттың урталарына тиклем берәү ҙә ҡояш нурҙарының зыянлы булыуы тураһында уйлап та ҡарамаған. Яҡынса 1950 йылдарҙан башлап тикшеренеүҙәр үткәрелгән һәм дөйөм алғанда, ультрафиолет организм өсөн кәрәкле, тип табылған.

Ыңғай яҡтары

Матдәләр алышыныуы. Ҙур булмаған күләмдәге UV-A менән UV-B нурҙары (яҡынса яҙғы йылы көндәге кеүек) тотош организмда барған системаларҙы көсәйтеп ебәрә. Мәҫәлән, аҡһым менән углеводтар 3 процентҡа әүҙемерәк үҙләштерелә. Үҫеш гормоны, енси, ҡалҡан биҙе гормондары бүленеп сығыуы 2-13 процентҡа арта, шешеү реакцияһы менән стресс йышлығы түбәнәйә. Ҡайһы бер ғалимдар раҫлауынса, ҡояш нуры дарыуҙарҙың тәьҫирен 50 процентҡа көсәйтә.

Иммун системаһы. Вирус менән бактерияларҙан һаҡланыу 5-15 процентҡа көсәйә, аллергия осраҡтары, киреһенсә, түбәнәйә.

Күҙҙәр. Ҡан әйләнеше көсәйеүе күҙҙең селтәрле ҡабығына яҡшы тәьҫир итә. XX быуаттың башында уҡ күҙҙең селтәрле ҡабығы дистрофияһын ҡояш нурҙары ярҙамында уңышлы дауалағандар. Бының өсөн пациенттар бер нисә минут байып барған ҡояш нурҙарына ҡарап торорға тейеш булған.

Үпкәләр. Улар өсөн ультрафиолет ҡына түгел, ә күҙгә күренгән яҡтылыҡ та файҙалы. Был осраҡта газ әйләнеше - 11, кислород ҡулланыу 13 процентҡа арта, һөҙөмтәлә бөтөн ағзалар һәм туҡымалар яҡшы итеп "тын ала". Даими рәүештә 15 минут ҡояш нурҙары ашында йөрөү тын юлдары сирҙәрен 15 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, ультрафиолет һауаны зарарлы матдәләрҙән таҙарта.

Һөйәктәр. Ультрафиолет D витамины синтезы өсөн кәрәк. Был витаминға ҡытлыҡ булғанда организмда кальций менән магний насар үҙләштерелә. Иртәле-кисле 15-20 минут ҡояшта йөрөүселәр остеопороз хәүефен 23 процентҡа түбәнәйтә, уларҙа остеохондроз да һирәгерәк осрай.

Тире. Экзема, нейродермит, бәшмәк ауырыуҙары ваҡытында UV-нурҙары тиренең торошон яҡшырта. Псориаз һәм майлы себорея мәлендә ҡояш тирене 97-100 процентҡа таҙарта ала. UV-B тәьҫире аҫтында бүленеп сыҡҡан меланин пигменты организмда радиоактив матдәләрҙең тупланыуына ҡаршылыҡ итә.

Ҡан. D витамины етешмәһә, ҡан тамырҙары нығылмалылығы юғала. Ҡояшта йөрөү ҡан әйләнешен яҡшырта, гемоглобин һәм тромбоциттар күләме күтәрелә.

Кире яҡтары

Ҡояш нуры тире яман шеше - меланома барлыҡҡа килеү хәүефен арттыра. Ғәҙәттә, меланома диаметры 5 мм-ҙан ҙур булған миңдән барлыҡҡа килә. Был процесс 5 - 15 йылға һуҙылғанлыҡтан, унан дауаланыу мөмкинлеге 100 процентҡа тиң, бының өсөн диагноздың иртәрәк ҡуйылыуы ғына шарт. Шуға ла миңдәрегеҙ үҫә, ялтырай, йәки сиктәре үҙгәреп тора икән, мотлаҡ дерматологҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Ҡояш нуры аҫтында күпме йөрөргә ярағанлығы тураһында аныҡ кәңәштәр юҡ, шулай ҙа иртәнге 11-ҙән көндөҙгө 4-кә тиклем ультрафиолет нурҙары күберәк саҡта ҡыҙынырға тырышмағыҙ. Сәләмәтлек өсөн иртән һәм кисен ҡояшта 10-15 минут йөрөү ҙә етә. Был простата биҙе, күкрәк һәм тура эсәк яман шешен профилактикалау өсөн дә кәрәк.

Ҡояш нурҙарынан һаҡланыу өсөн тағы бер сәбәп - ҡояштың тирене ҡартайыуына килтереүе. Антиэйдж медицина өлкәһендә эшләүсе белгестәр әйтеүенсә, тиренең ҡартайыуы йәшкә түгел, ә 70 процентҡа ҡояш аҫтында артыҡ йөрөүгә бәйле. Меланома барлыҡҡа килеү осрағындағы кеүек, артыҡ ультрафиолет тире күҙәнәктәренең ДНК-һына зыян итеүсе ирекле радикалдарҙы күбәйтә. Коллаген епсәләре деградациялана - тире нығылмалылығын юғалта, төҫһөҙләнә. Был процестар ҡояшта янған һайын көсәйә бара. Шуға ла ни тиклем һирәгерәк ҡыҙынаһығыҙ, шул тиклем тиренең йәш булып ҡалыу мөмкинлеге ҙурыраҡ. Шуға ла кремдарҙың составында ҡояштан һаҡлаусы фактор булырға тейеш. Ул йәйен генә түгел, ҡышын да кәрәк.

УҢЫШ ҠАҘАН

ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

Уйланырға мәжбүр итергә тейешле һорауҙар

Аҡсаны ресурс итеп ҡарағыҙ. Заманында кемдер, аҡса тураһында һүҙ барғанда, кеше еңергә һәләтле түгел, тигән. Әгәр уны эшләүгә генә иғтибар туплаһағыҙ, һеҙ материалистҡа әүереләһегеҙ. Әгәр күберәк аҡса эшләргә теләп тә, бер нәмә лә килеп сыҡмай икән, һеҙ уңышһыҙ кеше. Әгәр ҙур сумма туплап, уны һаҡлай алаһығыҙ икән, һеҙ - һаран. Әгәр күп сумма эшләп, уны туҙҙыраһығыҙ икән - әләф-тәләф итеүсе. Әгәр капитал туплау уйығыҙҙа ла юҡ икән, дан яратмайһығыҙ. Әгәр бик күп аҡса эшләп, уларҙы үлгәнгә тиклем туҙҙырып бөтөрә алмағанһығыҙ икән, һеҙ йүләр, сөнки уларҙы үҙегеҙ менән алып китеүгә өмөтләнгәнһегеҙ.

Аҡса менән алышта, ысынлап та, еңеүсе булыу өсөн уларға тыныс ҡарарға һәм ысын ҡиммәткә эйә булған эштәр башҡарырға кәрәк. Э. Стэнли Джонс белдереүенсә: "Аҡса - һоҡланғыс хеҙмәтсе, әммә насар хужа. Әгәр улар өҫтөнлөк итә башлаһа, һеҙ уларҙың власы аҫтында ҡалып, ғүмер буйы ҡол буласаҡһығыҙ".

Бирергә ғәҙәтләнегеҙ. 1889 йылда миллионерсәнәғәтсе Эндрю Карнеги эссе баҫтыра һәм унда бай кешенең тормошо ике осорҙан: байлыҡҡа эйә булыу һәм уны бүлеү ваҡытынан торорға тейеш, тип белдерә. Үҙендә йомартлыҡҡа психологик көйләнеш булдырыу өсөн даими рәүештә нимәләр (ваҡытынды, иғтибарынды бүлеү, аҡса һәм ресурстарынды) биреү ғәҙәтенә эйә булырға кәрәк. Ричард Фостер былай тип кәңәш итә: "Аҡса йәки башҡа ниндәйҙер байлыҡ менән айырылышыу асылығыҙҙы үҙгәртә. Ул шайтан ҡотортоп торған һаранлыҡтан арындыра". Әгәр һаранлыҡ ҡоллоғонда икәнһегеҙ, артығыҙҙан башҡаларҙы эйәртерлек лидер булыу һеҙҙең өсөн түгел.

Ысынлап та һеҙ йомарт лидермы? Башҡаларҙың тормошона өҫтәмә ҡиммәттәр индереү мөмкинлеге биргән ысулдарҙы бер туҡтауһыҙ эҙләйһегеҙме? Ваҡытығыҙҙы кемгәлер бүләһегеҙме? Үҙегеҙҙең тормош һутын башҡаларға бирәһегеҙме? Үҙҙәренән ярҙам өмөт итеп булмаусыларға ярҙам итәһегеҙме? Яҙыусы Джон Беньян былай тип раҫлаған: "Һеҙгә бер ваҡытта ла хаҡын ҡайтара алмағандар өсөн нимәлер эшләмәнегеҙ икән, тимәк, бөгөнгө көндө йәшәмәнегеҙ". Әгәр һорауҙарға кире яуап бирһәгеҙ, ысын мәғәнәһендә йомарт лидер түгелһегеҙ әле.

Өйгә эш:

Үҙегеҙҙә йомартлыҡты үҫтереү өсөн түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:

- Хәҙер үк нимәлер биреге҂ҙ. Милек һеҙҙең өҫтөгөҙҙән ниндәй власҡа эйә икәнлеген асыҡлағыҙ. Үҙегеҙ өсөн ниндәйҙер ҡиммәткә эйә берәй нәмәне унан нығыраҡ файҙа алырҙай кешегә биреге҂ҙ. Быны аноним эшләһәгеҙ - бигерәк тә яҡшы.
- Аҡсаларығыҙға эшләргә мөмкинлек биреге҂ҙ. Әгәр берәйһендә күптәрҙең тормошона ыңғай йоғонто яһарлыҡ перспективалы идея булһа, уға ниәтен тормошҡа ашырыу өсөн ресурстар биреге҂ҙ. Аҡсағыҙға үҙегеҙ был донъянан киткәс тә йәшәрлек эштә эшләргә рөхсәт итегеҙ.
- Кәңәшсе булырҙай кешене табығыҙ. Әгәр лидерлыҡта билдәле бер кимәлгә етһәгеҙ, бирә алғандың иң ҡиммәте үҙегеҙ буласаҡһығыҙ. Тормошоғоҙҙо уға "һеңдерә" алған кешене табығыҙ. Һуңынан уның үҙенә иң яҡшы лидер булырға ваҡыт һәм ресурстар биреге҂ҙ.

Джон МАКСВЕЛЛ.



16 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.20 "Время обедать!"
15.00 "На чемпионате мира по футболу-2014" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Море. Горы. Керамзит". Мелодраматический сериал. 1-2 серии (12+).
23.20 "Вся жизнь в перчатках" (12+).
23.45 Ночные новости.
23.55 "Сборная России. Билет в Бразилию" (12+).
